ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 июнь (һөтай) 2024

№22 (1115)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:**

"Замана тәгәрмәсен" кем көйләр?



2-3

Ҡала көнө байрамы. Ул нисек барлыҡҡа килде?



6-7

Өфө серҙәрен аса, йәки Үткән замандан - киләсәккә



8-9

Өләсәйҙең күңел һандығы



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡал!* 10 июндән 20 июнгә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 786 һум 24 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ни өсөн йәшәү урыны итеп Өфөнө һайланығыҙ?

***Лена СӨЛӘЙМӘНОВА, тарих фәндәре кандидаты, профессор:*** Өфө - минең студент йылдарым үткән, аспирантура һәм докторантурала уҡыған йәшлегем ҡалаһы. Ул осор күп нәмәне танып белеү, гуманитар фәндәрҙең төрлө корифейҙары менән аралашыу мәле булыуы менән күңелемә яҡын. Йәшлек йылдарымдың тыуған яҡ тарихын өйрәнеү мәктәбенең нигеҙ һалыныуы ваҡытына тура килеүе менән бәхетлемен. Шул ваҡыттағы Өфөлә минең бөгөнгө көндәге уңышлы эшмәкәрлегемә нигеҙ һалынды, донъяуи ҡараштарым нығынды, дуҫтарым менән таныштым һәм ошо ҡалала нығындым. Шуға күрә Өфө минең өсөн яҡын һәм яратҡан ҡалам.

Бөгөнгө көндә Өфө Башҡортостандың баш ҡалаһы булыу менән бер рәттән, донъялағы бөтә башҡорттар өсөн дә уларҙы тыуған ерҙәре менән бәйләп торған ҡала. Һәм мин ошондай ҡалала йәшәүемде оло бәхет тип һанайым.

Өфө - бай тарихлы, ҡыҙыҡлы архитектураға бай булған ҡала. Йәшел ҡала тигән исемен йылдан-йыл һаҡлап килә алыуы ла оло мәртәбә. Ошо матурлыҡты киләсәк быуынға еткереү өсөн дә ҙур эштәр башҡарыуҙарын билдәләп үтергә кәрәктер. Ғөмүмән, ҡалалағы ыңғай үҙгәрештәрҙе күрмәү мөмкин түгел. Мәҫәлән, халҡыбыҙҙың лайыҡлы улдарына - М.Ғ. Рәхимовҡа, генерал-майор М.М.Шайморатовҡа һәйкәл асылыу Өфө генә түгел, тотош Башҡортостан өсөн күптән көтөп алынған ваҡиға ине. Был һәйкәлдәр аша балалар, йәштәр һәм ҡала ҡунаҡтары айырым бер кешенең генә түгел, ә тотош төбәктең яҙмышын белә һәм өйрәнә.

Кеше үҙе өсөн комфортлы, уңайлы йәшәү урынын һайлай. Минең өсөн Өфө нәҡ ошондай урын. Бында бөтә нәмә бар: музейҙар, театр һәм кинотеатрҙар, ҙур магазиндар һәм башҡа уңайлыҡтар. Ҡаланың ҡояштан ҡыҙған таш урамдарында арып киткән саҡта еләҫтә ултырып хәл алырлыҡ парктары, тынды киңәйтеп ебәргән фонтандары, улар янында ағылған башҡорт моңдары - барыһы ла беҙҙең баш ҡаланы йәмләй һәм йәнләй.

Киләсәк - йәштәр ҡулында. Улар маҡсатлы, ынтылышлы, төрлө яҡлап үҫергә тырышалар. Шуға күрә йәштәр өсөн эшләр, күңел асыр, спорт менән шөғөлләнер, ғөмүмән, төрлө яҡлап үҫер өсөн уңайлыҡтар булдырыу фарыз. Ә беҙҙең республикала һәм Өфөлә барыһы ла урынеренә еткереп үтәлә. Тағы ла йәштәрҙең үҙ сығанаҡтарына ҡайтырға, тыуған телдәрен, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен белергә ынтылыуҙарын һөйөнөп күҙәтәм. Ошондай милли рухлы, прогрессив, заман менән бергә атлаған ҡалала йәшәгән һәр кемдең бәхетле булыуына шигем юҡ.

ҠУНАҠТАР ҺӨЙЛӘЙ

# УЛ САЛАУАТ ТУРАҺЫНДА...

## курс эше яҙған



**Өфөбөҙҙә төрлө мәҙәни, спорт, әҙәби һәм башҡа саралар йыш булып тора. Әле бына яңы ғына матур итеп "Китап байрамы" үтеп китте. Меңәрләгән китап һөйөүселәрҙе йыйған был матур сараға бик күпләп ҡунаҡтар килде. Оҙаҡламай 450 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәк Өфөбөҙ тураһында улар үҙ фекерҙәрен белдерҙе. Шуларҙың береһе билдәле яҙыусы Дарья ДОНЦОВА.**

- Мин Өфөлә беренсе тапҡыр һәм уның матурлығы күҙҙең яуын ала. Рәсәй буйлап күп йөрөргә тура килә. Ошондай ваҡытта күп кенә ҡалаларҙың ҡаралмағанлығы, хужа ҡулы етмәгәнлеге күҙгә ташлана. Урамдарҙың бысраҡ булыуы, ҡайһы бер күп ҡатлы йорттарҙың балкондары емерелеп тороуы һәм башҡа күренештәр уларға бер ҙә йәм өҫтәмәй. Ә Өфө үҙенең төҙөклөгө, бөтөнлөгө менән күп ҡалаларҙан айырылып тора.

Ҡалала иң һоҡланған күренеш - Салауат проспектында төҙөлөп ятҡан мәсет. Мин ундай матурлыҡты бер ерҙә лә күргәнем булманы. Мәсетте видеоға төшөрөп, үҙемдең социаль селтәрҙәремә һалдым, сөнки бындай матурлыҡты барыһы ла күрергә тейеш, тип уйлайым.

Өфөлә тағы күҙгә ташланып торған күренеш - балаларҙың күп булыуы. Бер бәпестәрен ҡулдарына, икенсеһен коляскаға ултыртҡан, ә яндарында тағы бер бала йүгереп уйнаған ғаиләләрҙең дә күп булыуын күреү шатлыҡлы тойғоларға сорнаны мине.

Өфө кешеләренең йөҙҙәрендә йылмайыу балҡый, күҙҙәрендә оҫкондар уйнай. Бөтә был күренештәр, тимәк, Өфөлә барыһы ла яҡшы, тигәнде аңлата, - тине ул үҙ тәьҫораттары менән уртаҡлашып.

Әйткәндәй, Дарья Донцова Өфөлә беренсе тапҡыр булһа ла, Башҡортостан менән күптән бәйләнештә, тип әйтергә була. Ул студент йылдарында, башҡорт халҡының милли геройы, быйыл 270 йыллыҡ юбилейы билдәләнәсәк батырыбыҙ Салауат Юлаев тураһында курс эше яҙған булған.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

12+

✓ *Элек тик машиналар ҡуйыу урыны булған Совет майҙанына хәҙер һоҡланып ҡарайбыҙ. Миңлеғәле Шайморатовҡа ҡуйылған һәйкәл был майҙандың ғына түгел, тотош Өфөнөң күренекле урындарының береһенә әйләнде.*



БАШ ҠАЛАМ

# ӨФӨБӨҘ ЙӨҘӨН ҮҘГӘРТӘ

**Үҙенең 450 йыллыҡ юбилейын ҡаршы алырға йыйынған Өфөбөҙ көндән-көн үҙгәрә, матурая. Баш ҡала урамдарынан үткән һәр кем Өфөлә алып барылған эштәрҙең ни тиклем дәррәү башҡарылыуына шаһит. Ҡунаҡтар ҡаршы алырға йыйынған хужалар кеүек, бер урын да күҙ уңынан ысҡындырылмай - йорттар, ихата алдары һәм юлдар төҙөкләндерелә, күптән алыштырыуҙы талап иткән иҫке ағастар урынына йәш үҫентеләр ултыртыла, яңынан-яңы арт-объекттар барлыҡҡа килә һәм башҡалар.**

Әйтергә кәрәк, ҙур юбилейға әҙерлек бөгөн йәки быйыл ғына башланманы, ул эҙмә-эҙлекле рәүештә күптән алып барыла. Мәҫәлән, элек тик машиналар ҡуйыу урыны булған Совет майҙанына хәҙер һоҡланып ҡарайбыҙ. Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовҡа ҡуйылған һәйкәл был майҙандың ғына түгел, тотош Өфөнөң күренекле урындарының береһенә әйләнде. Был скульптура ансамбле тотош Башҡортостан, башҡорт халҡының тарихын сағылдырған монументаль һәйкәл булыуы менән беҙҙең күңелдәрҙә үҙ урынын алды. Күптән түгел әлеге мемориаль комплекс X Халыҡ-ара НОПРИЗ конкурсы (Проектлаусылар һәм эҙләнеүселәрҙең милли берекмәһе) наградаһына лайыҡ булды. Донъяның төрлө илдәренән тәҡдим ителгән 1400-ҙән ашыу проект араһында комплекс авторҙары Салауат Щербаковтың һәм архитектор Константин Донгузовтың "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу һәм төҙөкләндереү объекттары араһында иң яҡшы проект (тормошҡа ашырылған)" номинацияһында беренсе дәрәжә диплом яулауҙарын ысын мәғәнәһендә лайыҡлы, тип билдәләргә кәрәк.

Өфөнөң йөҙөн үҙгәрткән яңылыҡтар араһында шулай уҡ реконструкциялауҙан һуң асылған Аксаков паркын да билдәләп үткем килә. Күптәрҙең яратҡан паркына яңы һулыш бирелгән, шул уҡ ваҡытта өфөләрҙең һәм ҡала ҡунаҡтарының күңеленә яҡын үҙенсәлектәре һаҡланған. Хәҙер унда матур саралар тағы ла йышыраҡ уҙғарыла, концерттар ҡуйыла, балалар өсөн дә төрлө уйындар ойошторола.

Өфө оҙаҡ йылдар Рәсәйҙәге иң йәшел ҡалалар араһында тәүге урындарҙы тотоп килә. Ҡала урамдарында күпләп үҫкән төрлө ағастар, ҡала уртаһында һаҡланып килгән ҙур парктарҙың булыуы тәьмин итә уға был исемде. Ләкин баш ҡала урамдарындағы күпселек ағастар күптән алыштырыуҙы талап итеүен быға тиклем әллә күрмәнек, әллә иғтибар итмәнек. Өфө урамдарынан атлап йөрөгән бөйөк шәхестәребеҙҙең иҫтәлектәрен һаҡлаған, ҡала һәм республика тормошондағы бихисап ваҡиғаларға шаһит булған йөҙйәшәр ағастар хәүеф тыуҙырыусыға әйләнде. Быны шулай икәнен яңыраҡ ҡына Өфөлә булған көслө ел ваҡытында машина, йорт, урамдарға ағастарҙың ҡолауы иҫбат итә. Шуға күрә, күңелгә ни тиклем ҡыйын булмаһын, беҙгә яратҡан "олоғайған" ағастарҙың йәш ағас үҫентеләре менән алыштырылыуына ҡыуанырға кәрәк. Улар ҙа тиҙ арала эҫенән һаҡлаусы күләгә биреп, яҙын Өфө урамдарын йүкә сәскәһе еҫтәренә күмеп, "Йәшел ҡала" исемен һаҡлап ҡалырға мөмкинлек биреүсе мәғрур ағастар булып, үҫеп етер әле. Үҙгәрештәрҙе ыңғайға юрарға һәм һәр яңылыҡты асыҡ йөҙ менән ҡаршы алырға кәрәк.

Өфөбөҙ алда тағы ла ҙур-ҙур юбилейҙарын ҡаршы алыр. Ә беҙ, уның 450 йыллығын байрам итеүенә шаһит быуын булыуыбыҙ менән ғорурланып, киләсәк быуынға бөгөнгө Өфөбөҙҙөң ниндәй матур, уңайлы һәм бөтә республика халҡының элек-электән иң яратҡан ҡалаһы икәнлеген һөйләп ултырырбыҙ әле.

**Азамат СИРҒӘЛИН.**

КӨНАУАЗ

**Башланды! Эйе, йәй, каникулдар һәм балалар менән тап ошо мәлдәрҙә йыш була торған һәр төрлө күңелһеҙ мажаралар... Дөрөҫ, баш ҡала яны балалар лагерҙарында, мәктәптәрҙең үҙҙәрендә лә уҡыусыларҙы спорт, хеҙмәт, мәҙәни-ойоштороу сараларына йәлеп итеп, уларҙы бер урындараҡ туплап тотоу эштәре йыл һайын атҡарылып килә, ләкин шул "ҡараулы" хәлдә лә ошоға тиклем балалар менән булған бәхетһеҙлек осраҡтары онотолмай әле, ҡыҙғаныcҡа. Икенсенән, балаларҙың бөтәһе лә йәйге ялын, ике үҫмерҙең осраҡлы һөйләшеүенән ишетелгәнсә, "лагерҙа бикләнеп" үткәргеһе килмәй һәм улар күбеһенсә урамдарҙа елғыуарлыҡ менән шөғөлләнеүҙе артыҡ күрә.**

# "ЗАМАНА ТӘГӘРМӘСЕН" КЕМ КӨЙЛӘР?

Дөрөҫ, республикала балиғ булмаған балалар өсөн 1 июндән төнгө ваҡыттарға комендант сәғәте ғәмәлдә, тик быны улар менән мажаралар, үкенескә, йышыраҡ көндөҙгө мәлдәрҙә булыусан. Мәҫәлән, хәҙер һыу инеү миҙгеле етә. Йыл һайын һыуға батыусылар араһында балаларҙың да байтаҡ булыуы айырыуса ҡыҙғаныс. Йыл һайын тигәндәй, хәҙер шулай уҡ уларҙың хәүефһеҙлегенә һәм ғүмеренә янаусы тағы бер замана ҡазаһы барлыҡҡа килде: электр самокаттары. Ошо көндәрҙә генә (27 һәм 29 май), мәҫәлән, Өфөлә әлеге ике тәгәрмәсле "елдереү сараһы" менән бәйле ике юл-транспорт ҡазаһы теркәлде: Аксаков урамында "Киа Соул" руле артындағы ҡатын киҫкен боролош яһап, тротуар буйлап самокатта килгән үҫмерҙе бәреп йыға. Октябрҙең 50 йыллығы урамында икеһе бер самокатта елдереүсе үҫмер егет менән ҡыҙ "Фольксваген Поло" тәгәрмәстәре аҫтына эләгә. Бәхеткә, уларҙың өсөһө лә иҫән, тик ныҡ бәрелеп, мейе һелкенеү менән генә "ҡотолалар".

Ә бит был хәлдәрҙең төҙәтеп булмаҫлыҡ фажиғә менән тамамланыуы ла ихтимал ине, сөнки бөгөн текә машиналарҙа күҙҙәре тоноп, аҡты-ҡараны айырмай ҙур тиҙлек менән елдереүсе иҫерек водителдәр ҙә күбәйҙе. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: 31 майҙа ғына ла бер тәүлек эсендә ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре тарафынан Өфө ҡалаһында 55 юл-транспорт осрағы теркәлһә, Башҡортостан буйынса эскән килеш рулгә ултырған 61 кеше тотола һәм машина йөрөтөүҙән мәхрүм ителә. Шуларҙың 5-әүһе иҫерек килеш машинаға ҡабатлап ултырырға баҙнат иткән. Уларҙы енәйәт яуаплылығы көтә. Ә махсус рейд барышында бөтәһе 1,7 мең (!) юл-транспорт ҡағиҙәһен боҙоу осраҡтары менән бәйле административ материал төҙөлгән.

Хуш, ә бына самокаттар менән ни эшләргә һуң? Был бит быйыл ғына башланып торған проблема түгел. Былтыр һәм унан алдағы йылдарҙа ла ул мәсьәлә ҙур борсолоу һәм йәйәүлеләрҙә генә түгел, киң йәмәғәтселектә лә ризаһыҙлыҡ тыуҙырғайны. Шул сәбәпле былтыр Өфөлә уларға ҡарата яңы юл ҡағиҙәләре лә индерелде, ләкин, күренеүенсә, уның самокатсыларға бер ниндәй ҙә йоғонтоһо булмаған, улар быйыл тағы ла шәберәк

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ни өсөн йәшәү урыны итеп Өфөнө һайланығыҙ?

***Раян МИҺРАНОВ, "ЦТМ-Медицина" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең генераль директоры:*** Мин Белорет районында тыуып үҫтем. Мәктәпте Өфөнөң Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатында тамамлап, баш ҡаланың Башҡорт дәүләт медицина университетында белем алдым. Әлеге мәлдә лә тормош юлым республикабыҙҙың баш ҡалаһы менән бәйле.

Шулай итеп, Өфө - минең белем алған, шәхес булып формалашыуҙа ҙур роль уйнаған ҡала. Тормошомдоң нәҡ ошо мегаполисҡа, ата-бабаларыбыҙҙың әллә күпме быуат элек үк нигеҙ һалған ерҙәренә бәйле булыуы минең өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Дәүләт һаҡлауындағы тарихи-археологик ҡомартҡыбыҙ - Өфө II ҡаласығы булған урында йәшәүемә, эшләүемә, балаларымдың нәҡ ошонда үҫеүенә шатмын. Әлбиттә, милләттәштәр бөтә донъя буйлап таралып, матур итеп йәшәй, эшләй, ләкин мин үҙемдең Башҡортостандан, Өфөнән ситтә йәшәүемде күҙ алдына килтерә алмайым.

Ваҡыт үтә, Өфөбөҙ үҙгәрә, матурая, ҙурая. Һуңғы арала эсендә генә булған үҙгәрештәргә күҙ һалғанда ла ҡаланың заман менән бергә атлауын күрәбеҙ. Яңы юлдар төҙөлә, күпме кешенең көндәлек тормошон күпкә яҡшыртҡан "Көнсығыш сығыу юлы" асылды, ҡаланың үҙендә лә, уның эргә-тирәһендә лә күпләп төҙөкләндереү эштәре алып барыла, йорттар төҙөлә, инфраструктура яҡшыра - быларҙың барыһы ла Өфөнө йәшәү өсөн уңайлы ҡалаларҙың береһе итә.

Рухи йәһәттән үҫеү өлкәһендә лә Өфөбөҙ ҡыйыу аҙымдар менән алға атлай. Ауыҙ тултырып рәхәтләнеп һәр урында ла үҙ телебеҙҙә аралашабыҙ, башҡорт телендә төрлө саралар йыш уҙғарыла, ғөмүмән, ошо йәһәттән ҙур эштәр башҡарыла. Мәғрур Уралда башҡорт булып тыуып, ерле халыҡтың исемен йөрөткән республикала, әллә күпме быуатлыҡ тарихҡа эйә Өфөбөҙҙә үҙемдең йәшәү урыным итеп һайлауымды тәбиғи итеп һанайым.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башгидрометүҙәктең метеофараз бүлеге етәксеһе Гөлназ Заһитова әйтеүенсә, майҙан сентябргә тиклем температура һәм яуым-төшөм йәһәтенән ниндәйҙер аномалиялар көтөлмәй. "Июлдә генә температураның норманан юғарыраҡ, ә яуым-төшөмдөң ғәҙәттәгегә ҡарағанда аҙыраҡ булыуы көтөлә. Июль һәм август айҙарында ут сығыу хәүефе юғары, был иң тәүҙә яуым-төшөм булмауға бәйле. Августа республиканың көньяҡ һәм көнбайыш райондары тәбиғәт янғындарына дусар булыуы мөмкин. Айырыуса хәүефле райондар: Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Күгәрсен, Белорет, Әбйәлил һәм Хәйбулла", - тине Гөлназ Заһитова.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ростех дәүләт корпорацияһының "Технодинамика" холдингы составына ингән "Гидравлика" агрегат предприятиеһы коллективын 85 йыллыҡ юбилейы менән ҡотланы. "Был - республикабыҙ сәнәғәте флагмандарының береһе. Бында авиация һәм ракета-йыһан тәғәйенләнешендәге продукция әҙерләп сығаралар. "Гидравлика" илебеҙ өсөн стратегик яҡтан мөһим проекттарҙа ҡатнаша, илебеҙ самолёттары өсөн изделиелар сығара. Улар иҫәбендә - МС-21, Ту-214 пассажир лайнерҙары, Ил-96-400М һәм башҡалар", - тип яҙа Радий Хәбиров үҙенең социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала ҡыйыҡты капиталь ремонтлау программаһын бойомға ашырыу барышы хаҡында һөйләне. "Өсөнсө йыл инде ҡыйыҡтарҙы капиталь ремонтлауға бюджеттан аҡса бүләбеҙ. Был программаны ауыл райондарында йәшәүселәргә ярҙам итеү өсөн башлап ебәрҙек", - тип билдәләне Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында. Программа берлектә финанслау шарттарында тормошҡа ашырыла. Аҡсаның бер өлөшө - республика, ҡалғаны муниципаль бюджеттан бүленә. Бынан тыш, милекселәрҙең иғәнәләре иҫәпкә алына. Ремонт эштәрен ноябргә тамамлау күҙаллана.

✓Дәүләт Думаһына Рәсәй биләмәһендә вейптарҙы тулыһынса тыйыу тураһында закон проектын индерәләр. ТАСС һылтанма яһаған документта никотин, шул иҫәптән никотин тоҙо, шулай уҡ никотинлы һәм никотинһыҙ шыйыҡсалар менән ваҡлап сауҙа итеүҙе тыйыу хаҡында әйтелә. Йәғни вейптарҙы ла, улар өсөн шыйыҡсаларҙы ла тыйыу тураһында һүҙ бара. Бынан алдараҡ "Башинформ" Башҡортостанда 14 йәшлек үҫмерҙең ауыҙында электрон тәмәкенең шартлауы тураһында хәбәр иткәйне.

**✓ Һуңғы дүрт айҙа баш ҡала биләмәһендә 365 юл ваҡиғаһы теркәлгән, шуларҙың 120-һе - йәйәүлеләрҙе тапатыу... Автомобиль водителдәренең юл бирмәү осраҡтары бар. Йә иһә тейешле дистанция тотмайҙар.**



Мәүлиев ошо көндәрҙә электр самокатсыларға яңы сикләүҙәр индереү хаҡында хәбәр итте. Был мәсьәлә ҡала прокуроры Сергей Воронов һәм Өфө буйынса Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге инспекцияһы начальнигы менән бергә ултырып тикшерелгән. Мәүлиев әйтеүенсә, самокаттар менән файҙаланыусылар һаны йылдан-йыл арта бара. Былтыр был төр транспорт менән йөрөүселәр һаны 172 мең тәшкил иткән.

Шуның менән бергә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юл-транспорт ҡазалары ла арта бара. Быйылғы сезон башланып ҡына тороуға ҡарамаҫтан, самокатсылар менән бәйле 13 юл хәрәкәте тәртибен боҙоу осрағы теркәлгән дә инде. Шуға күрә уларға ҡарата тыйыу сараларын көсәйтеү, йәғни юл аша сыҡҡанда һәм кеше күп йөрөгән йәйәүлеләр тротуарҙарында самокаттарҙың тиҙлеген сәғәтенә 5 километрҙаса сикләү, шулай уҡ был транспорт төрөнә беркетелгән табличкаларҙы, самокат йөрөтөүсенең шәхесен асыҡлау өсөн, ҙурайтыу кеүек саралар ҡарала. Әйткәндәй, тиҙлек сикләү, самокатсыларға штраф санкциялары хаҡында былтыр ҙа һүҙ булып алғайны ул алыуын. Ҡыҙғанысҡа, Дәүләт Думаһында быйыл да индивидуаль мобиль саралар (СИМ) йөрөтөүселәр өсөн 30 меңгә тиклем штраф тураһында закон проекты хупланһа ла, һаман булһа үҙ көсөнә инә алмай ята...

тиҙлек менән йәйәүлеләр араһынан киҫкен боролоштар яһап, елдереүҙәрен дауам итәләр. Былтыр, хәтерләһәгеҙ, май айында ғына ла 17 малай самокаттан ҡолап, ауыр йәрәхәттәр алғайны. Шуларҙың береһе - йығылыуы арҡаһында инсульт алған һәм 17-се Өфө ҡала дауаханаһының реанимация бүлегендә ятҡан 16 йәшлек үҫмер янында БР һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин булып китте, тип хәбәр иткәйне былтыр мәғлүмәт саралары. Әйткәндәй, "министр обходы" дауахананың травматология бүлегендә тағы бер нисә баланың самокат, велосипедтан ҡолап дауаланып ятҡан мәләнә тап килгән. Шул осраҡтан һуң министр республиканың бөтөн ата-әсәләренә йәйге айҙарҙа балаларынан күҙ өҙмәй ҡарап, хәстәрләп тороуҙы һәм улар менән хәлде аңлатып, һөйләшеүҙәр кәрәклеге тураһында социаль селтәрҙә мөрәжәғәт иткәйне.

Ғаилә тәрбиәһе лә был йәһәттән әллә ни һөҙөмтә бирмәгән, күрәһең. Хәҙер сират - ҡала властарына. Өфө хакимиәте башлығы Ратмир

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Өфө мэры Ратмир Мәүлиев ойоштороған кәңәшмәлә Эске эштәр министрлығының Өфө буйынса идаралығының бүлек начальнигы, майор Раул Бикбулатов бына нимә тине:*** Һуңғы дүрт айҙа баш ҡала биләмәһендә 365 юл ваҡиғаһы теркәлгән, шуларҙың 120-һе - йәйәүлеләрҙе тапатыу... Автомобиль водителдәренең юл бирмәү осраҡтары бар. Йә иһә тейешле дистанция тотмайҙар. Бындай хәлдәр йышыраҡ кеше күп йөрөгән юл саттарында була. Йәйәүлеләргә хәүеф янаған урындар - "зебра" йә иһә велосипед зонаһы аныҡ сикләнмәгән тротуарҙар. Өфөнөң барса мөһим урамдарында һәм юл саттарында йәйәү йөрөүселәр мәнфәғәтен иҫәпкә алған юл билдәләрен яңыртыу фарыз. Мәктәптәрҙә, гәзит биттәрендә һәм телеэкрандарҙан аңлатыу эштәре алып барыу ҙа бик мөһим.

Эшҡыуар Рим Бикмаевтың килеп тыуған хәлгә үҙ ҡарашы бар. Уны йәмәғәт арауыҡтарын ойоштороу буйынса белгес тип атап була. Мәҫәлән, Өфө үҙәгендә ул ойошторған "Арт-КВАДРАТ" бер нисә урамды берләштерә. Ә байтаҡ ҡына урамдар шәхси мобиль саралар өсөн үтә уңайһыҙ. "Беҙҙең байтаҡ ҡына урамдарыбыҙҙа тротуарҙарҙың бик тар булыуы бер кем өсөн дә сер түгел. Ә уларҙа хәрәкәт итеү тығыҙлығы юғары. Бындай участкаларҙы самокаттар өсөн ябыуҙы тәҡдим итәм. Әлбиттә, уларҙы урап үтеүҙе лә ойоштороу менән", - тип үҙ фекере менән бүлеште ул.

Өфө мэры Ратмир Мәүлиев ойоштороған махсус кәңәшмәлә кикшеринг (электросамокаттарҙы арендаға биреүсе компаниялар) операторҙары ла ҡатнашты. Улар фекеренсә, юл саттарында контролде көсәйтеү талап ителә. Улар иң тығыҙ хәрәкәтле юл саттарын автомобилдәр менән ҙур тиҙлектә үтеп булмай торған махсус япмалар менән ҡаплауҙы тәҡдим итте. "Ҡағыҙәләрҙе үтәмәүселәрҙе хатта осраҡлы рәүештә шаһит булыусылар, водителдәр асыҡлай ала: аныҡ фотография эшләп, уны ЮХХДИ-ның чат-ботына ебәрергә кәрәк. Йә иһә арендаға биреүсе компанияның ошондай уҡ мәғлүмәт порталына. Иң тәүҙә беҙ бында ҡабул иткән ҡарарҙарҙы йәйәү йөрөү арауыҡтарында, мәҫәлән, "Өфө муйынсаһы"нда ҡулланыу фарыз", - тине кикшерингсылар.

## ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# "МӨҘҘӘТЕ СЫҠҠАН" САМА БЕЛМӘЙ...



**Ишеттегеҙме әле, Пентагон хәрби стратегияға... Рәсәйҙән өйрәнергә булған! Ошо маҡсатта Көнбайыш авторҙары баҫмаларының һәр береһе өсөн 600 доллар хаҡ менән тендер иғлан ителгән. Был хеҙмәттәр АҠШ Хәрби-Һауа көстәренең хәрби осоусыларын уҡытыу өсөн файҙаланыласаҡ, тип яҙа "Новости. Рәсәй агентлығы".**

Һатып алынасаҡ китаптар иҫәбендә, мәҫәлән, Лондон короллеге колледжы лекторы Офера Фридмандың "Стратегия: Рәсәй хәрби стратегияһы нигеҙҙәре", Эндрю Моргандың "Лидер державалар ярышында Рәсәйҙең төп статегияһы" һәм инглиз авторы Самуэл Моргандың Рәсәй-Украина конфликты хаҡындағы китаптары бар. Өҫтәүенә, яһалма интеллект һәм йыһан стратегияһы, шулай уҡ Ҡытай хаҡында китаптарға ла ихтыяж бар икән. АҠШ, бына шулай, хәрби оҫталыҡтың ғүмер буйы хөсөтлөк ойоштороп түгел, ә ҙур һуғыштарға ҡаршы көрәшеп, еңеү яулағанда ғына килә икәнен, ниһайәт, аңлаған һымаҡ. Ғәҙәттә һәләт еңә, тип бушҡа әйтмәгәндәр, күрәһең.

Ә шулай ҙа АҠШ президенты Байден шул өйрәнелгән ғәҙәтен ҡыуыуҙан туҡтай алмай, сөнки, әлеге лә баяғы, Пентагондың бар шөғөлө ыҙғыш һәм ғауға ҡуптарыу бит. Көнбайыш ҡоралын Рәсәй территорияһын утҡа тотоу өсөн файҙаланыу хаҡында Украина Ҡораллы көстәренә күрһәтмә биреү факты тап әле әйтелгәнгә асыҡ миҫал булды ла инде. Хәйер, НАТО-ның Украина конфликтын артабан йәйелдерергә маташыуҙарына Рәсәй киң һәм күп төрлө арсенал менән яуап бирергә әҙер. Был хаҡта Стимсон үҙәге ғилми хеҙмәткәре Эмма Эшфорд Foreign Policy журналында яҙып сыҡты. "Конфликтты артабан йәйелдереү Көнбайышҡа ҡиммәткә төшөүе бар, сөнки Рәсәйҙең ядро ҡоралы ҡулланмайынса ла ҡапма-ҡаршы яуап бирерлек варианттары һәм мөмкинлектәре етерлек. Ә Көнбайышҡа был кәрәкме?.."- тип яҙа автор. Рәсәйҙең хәрби журналисы Евгений Поддубный Украина ҡоралы көстәренең Көнбайыш ҡоралы менән илебеҙҙең сик биләмәләрен утҡа тотоуы хаҡында яҙып, Америкала етештерелгән HIMARS реактив залп уты снарядтарының пыран-ыран килтерелгән ҡалдыҡтарын фотоға төшөрөп баҫтырып та сығарҙы. Аңлағанға - ишара, юғиһә, Рәсәй һүҙендә тора белә, һәм был башбаштаҡлыҡҡа ҡаршы яуаптың башы ғына әле.

**Үткән аҙна ахырына ҡарата төп яңылыҡтарҙан ҡыҫҡа хәбәрҙәр:**

- Иран президенты Ибраһим Рәиси авиафажиғәлә һәләк булыу менән бәйле, уның урынына 28 июнгә сираттан тыш ил башлығын һайлау көнө билдәләнде. Буласаҡ һайлауҙарҙа 2005-2013 йылдарҙа ике мөҙҙәт рәттән ил менән идара иткән билдәле сәйәсмән Мәхмүд Әхмәдинежад та ҡатнашасаҡ. Президент итеп һайланғанға тиклем ул Тегеран губернаторы вазифаһын биләгән.
- Украинаның Дәүләт ил сиге хеҙмәте хәбәр итеүенсә, илдәге мобилизациянан ҡасып, Украина сиген үтергә тырышҡан 45 кеше һәләк булған. Ләкин ысынында иһә илдән ҡасып сығырға теләп, һәләкәткә осрағандар байтаҡҡа күберәк. Май айында ғына ла Тиса йылғаһын йөҙөп сыға алмайынса, 10 кеше һыуға батып үлгән.
- Израиль армияһы Газа секторының көньяғында һөжүм хәрәкәтен көсәйтә бара. Палестина сығанаҡтары хәбәр итеүенсә, Израиль тарафынан туҡтауһыҙ утҡа тотоуҙар һәм авиация һөжүме арҡаһында Рафах районында палестиндар күпләп һәләк була.
- Халыҡ-ара даирәләрҙә үткер телле сәйәсмәндәр әйтмешләй, "мөҙҙәте сыҡҡан" Зеленский, ысынлап та, бөтөнләй ысынбарлыҡ самаһын юғалтҡан, буғай: Швейцарияла үҙе ойошторорға маташҡан "тыныслыҡ саммитына" аяҡ салырға маташа, тип, Ҡытайға гәйеп ташларға баҙнат иткән. Йәнәһе лә, ҠХР башҡа илдәрҙе саммитта ҡатнашмаҫҡа өндәй, имеш. Бүрәнә үтә бүре күреү тигәндәре шул булалыр, күрәһең...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Радий Хәбиров Сергей Безруковты һәм Денис Мацуевты юғары һөнәри оҫталығы һәм күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн бүләкләү тураһында указдарға ҡул ҡуйҙы. Хәҙер улар икеһе лә Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы исемен йөрөтәсәк. Танылған пианист, Рәсәйҙең халыҡ артисы Денис Мацуев һәм күренекле актёр, Рәсәйҙең халыҡ артисы Сергей Безруков Өфөнөң 450 йыллығына бағышланған саралар сиктәрендә музыкаль фестиваль һәм яңы спектакль менән килгәйне.

✓Башҡортостанда "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы бара. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин һөйләүенсә, 3-10 июнда табиптарҙың күсмә бригадалары Ҡырмыҫҡалы, Благовещен, Тәтешле, Яңауыл, Ишембай, Дыуан, Баҡалы һәм Учалы райондарында эшләй. Айрат Рәхмәтуллин әйтеүенсә, 15 апрелдән 31 майға тиклем табиптар 103 ауылда 54 меңдән ашыу пациентты ҡабул иткән һәм 13 меңгә яҡын рентген үткәргән.

✓Киләһе йылдан илдә ГТО нормативтарын уңышлы тапшырған һәм йыл һайын диспансеризация үткән өсөн һалым ҡайтармаһы барлыҡҡа килә. Был турала ил Президенты Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһағанда белдерҙе. "Спорт менән шөғөлләнеүселәрҙе дәртләндерергә кәрәк. Диспансеризация үткән, ГТО нормаларын тапшырған өсөн һалым ҡайтармаһы була. "Әсеүҙе ташла ла саңғыға баҫ" тигән әйтем хәтерегеҙҙәлер. Был тап шул осраҡ. Әйткәндәй, алкоголь тураһында. Беҙҙә ҡаты алкоголь ҡулланыу кәмегән", - тине дәүләт башлығы.

✓Башҡортостанда тыуып үҫкән опера йырсыһы Айгөл Әхмәтшина "30-ҙан 30-ға тиклем" Forbes рейтингына инде. Был хаҡта Башҡортостандың атҡаҙанған артисы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. Был рейтингка 30 йәшкә тиклем профессиональ берләшмәлә бөтә Рәсәй һәм глобаль кимәлдә танылыу яулаған күренекле шәхестәр, перспективалы йәш эшҡыуарҙар, идарасылар, финансистар, фән һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре, спортсылар, дизайнерҙар, яңы медиа йондоҙҙары, социаль проекттар авторҙары инә. Жюри, эксперт советы һәм редакция номинанттар исемлегенән Топ-30-ҙы һайлай.

✓ *Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә уҙған икенсе халыҡ-ара китап йәрминкәһе йомғаҡтарын баһалап, "Китап байрамы"н Рәсәйҙә иң яҡшыһы тип атаны.*



ҠЫҪҠАСА

# ТИҘҘӘН БАШЛАНА!

**Өфөнөң Әр-Рәхим мәсетенә манара төҙөү эшен тамамлау өсөн грек мәрмәренән эшләнгән изделиеларҙың беренсе партияһы килтерелде.** Тиҙҙән фасадты биҙәү башлана. Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты мөфтөйө Айнур Бирғәлин хәбәр итеүенсә, тағы ла алты йөк машинаһы мәрмәр килтерергә тейештәр. "Тормошобоҙҙа ике бөйөк байрам - Ураҙа һәм Ҡорбан байрамдары бар. Тап һуңғы Ураҙа байрамы ваҡытында хөрмәтле Радий Фәрит улының тырышлығы менән Әр-Рәхим мәсете төҙөлөшө әүҙемләште. Бына бөгөн Ҡорбан байрамы алдынан мәрмәрҙең тәүге партияһын ҡабул иттек", - тип хәбәр итте мөфтөй Айнур Бирғәлин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Радий Хәбиров Ураҙа байрамы унайынан социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Әр-Рәхим мәсетендә тикшереүҙе һәм юридик эштәрҙе тамамланыуы, проект-смета документацияһының тулыһынса тергеҙелеүе һәм уның экспертиза үтеүе тураһында яҙғайны.

✓ **Өфөлә рәсми рәүештә һыу инеү миҙгеле асылды. Быйыл баш ҡалала 10 рәсми пляж эшләй, хәҙер ял итеүселәрҙе ҡабул итеү өсөн әҙерлек эштәре алып барыла.** Өфөнөң граждандарҙы яҡлау идаралығы хеҙмәткәрҙәре йыһазландырылмаған ял урындарын контролдә тота. Улар баш ҡаланың йылға-күл буйҙарындағы барлыҡ законһыҙ пляждарҙы белә, шуға күрә алдан уҡ ошо хәүефле зоналарҙа һыу инеүҙе тыйған аншлагтар ҡуя башланы. "Бөгөнгә 129 аншлаг һәм 8 баннер ҡуйылған. Шуны иҫтә тотоу мөһим: тыйылған урындарҙа һыу ингәндә бәхетһеҙ осраҡтар йыш булып тора. Шуға күрә йылға йәки күл буйында ошондай билдәне күргәс, уны иғтибарһыҙ ҡалдырырға ярамай", - тип хәбәр иттеләр ҡаланың граждандарҙы яҡлау идаралығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓ **Быйылғы уҡырға инеү кампанияһы башланыуға күп ваҡыт ҡалманы. Медицина университетына уҡырға инеү өсөн БДИ һөҙөмтәләре буйынса уртаса 74,5 балл булырға тейеш.** Йүнәлтмә буйынса барғандарға Берҙәм дәүләт имтиханында - 70, ә коммерция нигеҙендә уҡырға теләүселәргә 69 балл йыйырға кәрәк. Медицина университетының иң ҙур һорау менән файҙаланған һөнәр - "Стоматология", үтеү балы яҡынса 280-гә тиң, ә "Дауалау эше" факультетында уҡырға теләүселәр өсөн ул 290 балл тәшкил итә. Быйыл БДМУ-ла 1003 урын асыла, уларҙың 965-е - белгеслек, ә 38-е-бакалавриат. Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы белдереүенсә, БДИ һөҙөмтәләре 4 йыл дауамында үҙ көсөнә эйә.

✓ **Дәүләт Думаһы икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа күп балалы ғаиләләргә ипотеканы ҡаплау өсөн ярҙам программаһын 2030 йылға тиклем оҙайтыу тураһында закон ҡабул итте, тип хәбәр итә Дәүләт Думаһының матбуғат хеҙмәте.** Ул Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамәһен тормошҡа ашырыу маҡсатында әҙерләнгән. "Дәүләт башлығы өсөнсө йәки артабанғы балалары тыуған ишле ғаиләләргә торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн дәүләттән 450 мең һум бүлеү бурысын ҡуйҙы", - тине Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин. - Дәүләт Думаһы балалы ғаиләләргә ярҙам саралырын киңәйтеү өҫтөндә эҙмә-эҙлекле эшләй. Был программаны йәнә ете йылға оҙайтыу - ишле ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү кимәлен күтәрергә тейешле мөһим ҡарар".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СЕНТЯБРҘӘ - ҺАЙЛАУ!



**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостан Республикаһы Башлығын һайлауҙы тәғәйенләү тураһында" ҡарар ҡабул итте.**

"Башҡортостан Республикаһының "Һайлауҙар тураһында" кодексына ярашлы, республика етәксеһен һайлау 8 сентябргә тәғәйенләнде, - тип хәбәр итте Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. "Тейешле ҡарар ҡабул ителгәс, рәсми рәүештә республиканың иң юғары вазифалы кешеһен һайлау буйынса кампания башлана. Сәйәси партияларҙан кандидаттар тәҡдим ителә. Башҡортостан Конституцияһына ярашлы, республика Башлығы итеп 30 йәше тулған, илебеҙ биләмәһендә даими йәшәгән Рәсәй Федерацияһы гражданы һайлана ала. Кандидаттың сит ил дәүләте гражданлығы йә иһә сит илдә йәшәп тороуға таныҡлығы йәки сит дәүләт территорияһында даими йәшәүгә хоҡуғын раҫлаған башҡа документы булырға тейеш түгел".

Республика Башлығын һайлау - төбәктең алдағы биш йылға үҫеш йүнәлешен билдәләгән мөһим ижтимағи-сәйәси ваҡиға, тине парламент спикеры. "Алдағы һайлау республика үҫеше өсөн оло әһәмиәткә эйә, - тине Константин Толкачев. - Унда ҡатнашыу - һәр һайлаусының законлы хоҡуғы. Республика Башлығын һайлауҙа беҙ стратегия һәм программа өсөн тауыш бирәбеҙ, киләсәгебеҙҙе һайлайбыҙ".

Республика халҡы Башҡортостан Башлығын, шулай уҡ ҡала һәм район округтарына депутаттар һайлаясаҡ, тип белдерҙе Радий Хәбиров. Ул муниципалитет башлыҡтарына махсус хәрби операция ветерандарының кандидатураһын күрһәтергә ҡушты. "Иғтибарығыҙҙы шуға йүнәлткем килә: депутаттар араһында мотлаҡ хәрби операциянан ҡайтҡан яугирҙар булһын ине. Унда Ватанды һаҡлаған һәм был илһөйәрлектең нимә икәнлеген яҡшы аңлаған аҡыллы кешеләр бик күп. Шуға күрә улар һәр муниципалитетта булырға тейеш", - тине Радий Хәбиров.

# ЙӘШӘҮ СИФАТЫНА БАҺА

**Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы 2023 йыл өсөн Стратегик башланғыстар агентлығы версияһы буйынса йәшәү сифаты рейтингы мәғлүмәттәренә үҙ фекерен белдерҙе.**

"Башҡортостан Республикаһы тәүге тапҡыр Рәсәйҙең иң алдынғы 20 төбәге иҫәбенә инде һәм 12-се урынды алды. 2021 йылда беҙ - 40-сы, 2022 йылда иһә 25-се урында инек. Рейтингта Рәсәйҙең барлыҡ 89 субъекты ла баһаланғанын иҫәпкә алғанда, был яҡшы. Экологик именлек, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф күрһәткестәре, ғаиләләргә ярҙам итеү, таҙалыҡ, хәүефһеҙлек, йәғни мөһим интеграль күрһәткестәр иҫәпкә алынған. Агентлыҡ рейтингты халыҡтың фекеренә таянып төҙөгән. Беҙ енеп сығырға өйрәнгәнбеҙ, 12-се урын - яҡшы һөҙөмтә, ләкин юғарыға ынтылырға кәрәк", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә уҙған икенсе халыҡ-ара китап йәрминкәһе йомғаҡтарын баһалап, "Китап байрамы"н Рәсәйҙә иң яҡшыһы тип атаны. "24 майҙан 26-һына тиклем Өфөнөң Совет майҙанында Халыҡ-ара китап йәрминкәһе гөрләне. Беҙҙең байрамға 173 мең кеше килде, был үткән йылға ҡарағанда 10 меңгә күберәк. Нәшриәттәр иҫәбенән ҡатнашыусылар байтаҡ ине. Беҙ ошо форум барышында Федор Шаляпин исемендәге Музыка музейын астыҡ. Минең гонә фекерем түгел, эксперттар әйтеүенсә лә, Рәсәйҙә был - иң яҡшы китап йәрминкәһе", - тине Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә. Ул шулай уҡ өсөнсө китап йәрминкәһенә әҙерләнә башларға ҡушты һәм киләһе йылда "Китап байрамы" майҙансығында филателистарҙың осрашыуын ойошторорға тигән тәҡдим индерҙе. "Йәшермәйем, бала сағымда филателия менән шөғөлләндем. Ул ваҡытта китап йәрминкәләрендә филателистарҙың, букинистарҙың осрашыуҙары үткәрелә торғайны. Уларға берәй урын асығыҙ, китапханасыларҙа ла саҡырырға мөмкин. Беҙҙең йәрминкә Рәсәйҙең төп китап йәрминкәһе булырға тейеш", - тине ул, республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡоваға мөрәжәғәт итеп.

# БЕЛЕМ УСАҒЫ ЯҢЫРА

**Баймаҡ лицей-интернаты капиталь ремонттан һуң полилингваль итеп үҙгәртелә. Бөгөн белем биреү учреждениеларын яңыртыу буйынса дәүләт программаһы сиктәрендә мәктәптә комплекслы ремонт эштәре бара.**

Программа бинаны ремонтлауҙан тыш, уҡытыусыларҙың квалификацияһын күтәреүҙе, дәреслектәрҙе һәм уҡыу әсбаптарын 100 процентҡа яңыртыуҙы, терроризмға ҡаршы хәүефһеҙлекте тәьмин итеүҙе күҙ уңында тота. Әлеге ваҡытта объектта төҙөлөш-монтажлау эштәре алып барыла. Төҙөүселәр билдәләүенсә, эш ырай, бригадаға татыу һәм үҙ эшенең оҫталары йыйылған. Шулай уҡ учреждение биләмәһендә төҙөкләндереү эштәрен алып барыу һәм ҡоралмалар һатып алыу буйынса сауҙалашыу үткәрелгән. "Лицей-интернатыбыҙҙың тулыһынса үҙгәрә барыуына бик шатбыҙ. Сөнки полилингваль мәктәптәр заманса ҡоралмалар менән йыһазландырыла, улар ҡарамағында күп функциялы киңлектәр асыла, уҡыусыларҙың ижады өсөн шарттар тыуҙырыла. Шуға беҙҙең коллектив республика Башлығы Радий Хәбировҡа, республика Хөкүмәтенә, мәғариф министрлығына, район етәкселегенә бик рәхмәтле", - ти лицей-интернат етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Илнур Дәүләткилдин.

Әйткәндәй, һуңғы биш йылда Баймаҡ районында ғына бер нисә белем усағы яңыртылды. Иҫке Сибай ауылында 375 уҡыусыға иҫәпләнгән яңы мәктәп төҙөлгән, мәктәптә белем биреү системаһын модернизациялау федераль программаһы сиктәрендә 3-сө, 1-се мәктәптәр, 4-се лицей, шулай уҡ Темәс, Ниғмәт, 1-се Төрөкмән ауылдары мәктәптәре капиталь ремонтланған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Дуҫлыҡ монументы янындағы Ағиҙел йылғаһы буйында Сухум ҡалаһындағы кеүек колоннада төҙөү эштәре бара. "Республика Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировҡа Өфөлә башҡорт һәм абхаз халыҡтарының дуҫлыҡ символын булдырыу башланғысы өсөн рәхмәт, - тип яҙа Өфө мэры Ратмир Мәүлиев үҙенең телеграм-каналында. - Ул ҡалабыҙҙың күркәм биҙәге булыр тип ышанам". Төҙөүселәр колоннаданы тәбиғи таш менән йөҙләй башлаған. Асыу тантанаһы быйыл 31 августа билдәләнгән.

✓Өфөлә Республика клиник перинаталь үҙәгендә 780 грамм булып тыуған сабыйға яңы ҡорамал ярҙамында беренсе операция яһағандар. Табиптар сабыйҙы ҡотҡарып ҡалған һәм һауыҡтырған. "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектының "Һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын яңыртыу" программаһы ярҙамында беҙ үпкәне яһалма еләтеү өсөн өс аппарат һәм наркоз-тын алыу аппаратын алдыҡ. Яңы ҡорамал менән беренсе операцияны яһаныҡ та инде", - тип белдерҙеләр медицина үҙәгендә.

✓Юл йөрөү хаҡын үҙгәртергә ҡарар иткән шәхси ташыусылар исемлегенә "АвтоМиг" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте лә ҡушылды. "АвтоМиг" маршруттарында юл хаҡы ҡулаҡса һәм карта менән түләгәндә 41 һум булһа, "Алға" карталы буйынса 34 һум. Был үҙгәреш маршруттар: 167-се "Өфө ағас эшкәртеү комбинаты - "Башҡортостан сәскәләре" баҡсалары - "Мега-Өфө"; 258-се "Көмөш шишмә" бистәһе (Дим) - "Сағыу" бистәһе - Өфө ағас эшкәртеү комбинаты".

✓"Башнефть" компанияһы тағы бензин хаҡын күтәргән. Компанияның яғыулыҡ ҡойоу станцияларында хәҙер АИ-95 АТUМ - 54,40 һум (+20 тин), АИ-92 - 49,40 һум (+20 тин), АИ-92 АТUМ - 50,50 һум (+20 тин), АИ-100 65,65 һум (+30 тин) тора. Дизель яғыулығы ла ҡиммәтләнгән, уның бер литры - 62,30 һум (+20 тин).

✓Башҡортостандың Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы директоры итеп элекке етәксенең хәрби хеҙмәт осорона Айгөл Рафаил ҡыҙы Әминева тәғәйенләнде. Хәбәр ителеүенсә, Милли китапхана директоры Марат Зөлкәрнәев 2022 йылда махсус хәрби операцияға алынды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Фестиваль ике шартлы өлөшкә бүленде. Тәүгеһе - "Тел лабораторияһы" - оҫталыҡ дәрестәре, белем биреү һәм күңел асыу саралары, уйындар менән байтаҡ майҙансыҡтарҙы үҙ эсенә алды.***



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# МИН БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘМ...

**1 июндәге Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөндәге иң сағыу, иң иҫтәлекле сара - ул, әлбиттә, баш ҡалалағы Арт-квадрат майҙанында "Мин башҡортса һөйләшәм" башҡорт ғаилә фестивале булғандыр. Майҙан башҡортса һөйләшеүсе балаларҙың күңелле тауыштарынан яңғырап торҙо. Сара Башҡортостан Башлығы грантына "Сәсәндәр үҙәге" һәм Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы тарафынан ойошторолдо.**



Фестиваль ике шартлы өлөшкә бүленде. Тәүгеһе - "Тел лабораторияһы" - оҫталыҡ дәрестәре, белем биреү һәм күңел асыу саралары, уйындар менән байтаҡ майҙансыҡтарҙы үҙ эсенә алды. Һәр майҙансыҡтың маҡсаты - башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләү, уны тормошта ҡулланыу мөмкинлектәрен күрһәтеү ине.

Музыкаль һәм шиғри батлдар зонаһын Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Шәһит Хамматов һәм уның ҡыҙы Ҡәҙриә алып барҙы. Ул "Тамыр" балалар йыр ансамбле ҡатнашыусыларының концерт номерҙары менән асылды. Бында кескәйҙәр ҙур теләк менән "Тирмәкәй", "Йомарт" урам театрҙарының сығышын, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры спектаклен ҡараны. "Ғаилә" балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәренең дәртле хореографик тамашаһы кескәй тамашасыларҙың күңеленә бигерәк тә хуш килде. Улар "Арбала" йырын - күк трактор тураһында йырҙың башҡортса вариантын күмәкләп башҡарҙы. Билдәләнгән ваҡытта бард йырҙарын башҡарыусылар сәхнәгә сыҡты. Уларҙан һуң фестивалгә килгән балалар башҡорт телендә шиғырҙар уҡыны. Уларҙың һәр береһе ойоштороусыларҙан дәртләндереү призы алды.

Фестивалде ойоштороусылар социаль селтәрҙә башҡорт телен популярлаштырған кескәй блогерҙарҙы бүләкләне. Үҙҙәренең бүләктәрен Сара менән Баязит Тайыповтарға, Ибраһим Сәғәҙиевҡа, Ҡәҙриә Хамматоваға "Вэлком РБ" туроператоры директоры Зөлхизә Ҡотлосурина һәм Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы директоры Гөлназ Йосопова тапшырҙы.

Шулай уҡ бында башҡорт бейеүе элементтары менән флешмоб үтте. Уны "Саптар" балалар өлгөлө хореография студияһы уҡытыусылары үткәрҙе.

Иң бәләкәйҙәр өсөн башҡорт аниматорҙары менән уйын зонаһы иң ҡыҙығы булғандыр, моғайын. Бында яратҡан геройҙарыбыҙ менән иҫтәлеккә фотоға төшөргә, шулай уҡ башҡорт халыҡ әкиәттәрен тыңларға, таштар менән уйындар уйнарға мөмкин ине. Әкиәттәр һәм уйындар аша балалар донъяны танып-белергә, ваҡиғаларҙы дөрөҫ аңлатырға, ҡатмарлы хәлдәрҙән сығыу юлдарын эҙләргә өйрәнде.

"Иң ҙур сәк-сәк" оҫталыҡ дәресе кескәй кулинарҙарҙы йыйҙы. Кукуруз таяҡсалары ярҙамында улар 1,5 метр бейеклектәге рекордлы милли ризыҡ эшләне. Оҫталыҡ дәресендә башҡорт аш-һыуы хаҡында һөйләнеләр.

Ошо зонала ҡуйылған тирмәлә психолог Гөлсинә Йосопова һәм логопед Регина Кирәева лекция уҡыны. Ата-әсәләр психологҡа үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын бирҙе, глобалләштереү шарттарында милли ғаиләлә балаларҙы тәрбиәләү үҙенсәлектәре тураһында фекер алышты. Логопед үҙенең лекцияһында дөрөҫ һөйләшеү һәм телмәр дефекттарын төҙәтеү алымдарына туҡталды, өндәрҙе дөрөҫ ҡуйыу буйынса кәңәштәр бирҙе.

Ата-әсәләр өсөн оҫталыҡ дәрестәре зонаһында төрлө һөнәрҙәргә өйрәттеләр. Сигеүсе Ғәбиҙә Вәлиева тамбурлы сигеү серҙәренә төшөндөрҙө, Илүзә Ҡаһарманова ҡыҙҙар өсөн мини-түшелдерек эшләү серҙәрен асты. Оҫтабикә Миләүшә Абайҙуллина боронғо кәсеп - балаҫ һуғып күрһәтте. Теләгән һәр кем милли биҙәктәр менән балсыҡтан тәрилкәләр яһарға һәм "Башҡорт ҡыҙы" брошкаһын эшләргә өйрәнде, ағас ҡалаҡтарҙы этник стилдә биҙәне. Кейеҙ баҫыу һәм башҡорт сәс биҙәүесе буйынса оҫталыҡ дәрестәре фестивалдә ҡатнашыусыларҙа айырыуса ҡыҙыҡһыныу уятты. Ошо уҡ зонала "Мираҫ" автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошмаһының рәссамы аквагрим ярҙамында балаларҙың йөҙҙәрен биҙәне.

Милли уйындар менән уйын зонаһы өлкәнерәк балаларҙы йыйҙы. Улар төрлө өҫтәл уйындарын уйнаны, бер ыңғай башҡорт телен, халыҡтың мәҙәниәтен һәм йолаларын өйрәнде. Ошонда уҡ республика балалар баҫмаларына яҙылыу ойошторолдо - "Йәншишмә" гәзите, "Аманат", "Аҡбуҙат" һәм "Әллүки" журналдары редакциялары хеҙмәткәрҙәре оҫталыҡ дәрестәре һәм күңелле уйындар үткәрҙе. Улар шулай уҡ балалар өсөн шашка буйынса турнир ойошторҙо. Малайҙар, әлбиттә, "Аврора" үҙәге хеҙмәткәрҙәре тирәләй йыйылды. Бында уларҙы планерҙар төҙөргә өйрәттеләр.

Башҡорт телен өйрәнеү өсөн дидактик материалдар күргәҙмәһендә ата-әсәләр яңы китаптар һәм дәреслектәр менән танышты.

Фестивалдең икенсе өлөшө Арт-квадраттың төп сәхнәһендә 17:00 сәғәттә башланды. Бында башҡорт эстрадаһының бойондороҡһоҙ йәш артистары концерты үтте. Азатлыҡ, эскерһеҙлек, ихласлыҡ - тап ошо ҡиммәттәрҙе беренсе урынға сығарҙы улар.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## АБДРАХМАНОВ БАРЫЙ АБДРАХМАН УЛЫ

А.Б. Абдрахманов - дәүләт һәм партия эшмәкәре. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы. Барый Абдрахман улы Абдрахманов 1916 йылда Башҡорт АССР-ының Белорет районы Татлы ауылында тыуған. Атаһы Абдрахмән Әхмәтов рус-япон һәм I Бөтөн донъя һуғышында ҡатнаша, граждандар һуғышында ғәйеп була. Сығышы ҡатай ырыуынан. Барый ауыл мәктәбендә уҡый, урман ҡырҡыусы булып эшләй. 1938 йылда Сәрмән педучилищеһын тамамлай, 1938-1939 йылдарҙа - уҡытыусы, 1939-1941 йылдарҙа ВЛКСМ-дың Белорет райкомының беренсе секретары.

1941-1946 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафтарында хеҙмәт итә. 1942 йылда Силәбе танк училищеһын тамамлай, 1943 йылға тиклем Төньяҡ-Көнбайыш фронтында 12-се айырым гв. танк полкында танк командиры. 1943 йылдан 1944 йылдың декабренә тиклем Беренсе Украин фронтының 58-се айырым гв. танк полкында танк взводы командиры. 1944 йылдың декабренән 1946 йылдың июленә тиклем - Байкал аръяғы фронтының 7-се айырым бронетанк полкында танк ротаһы командиры. Майор званиеһында демобилизациялана

Һуғыштан һуң КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының партия мәктәбендә уҡый, уны 1949 йылда тамамлай. 1950-1954 йылдарҙа - партияның Салауат райкомында беренсе секретарь. Шул саҡта ул ваҡыттағы Нуриман районының Тәкәй ауылы кешеләре һәм район етәкселәре Салауат Юлаев ошо ауылда тыуған, тип дәғүә белдерә, партия өлкә комитетына мөрәжәғәт итә. Әммә Б.А. Абдрахманов тыуған яҡ тарихын бик һәйбәт белеүсе Хәйрулла Ҡолмөхәмәтов ярҙамында тарихи хәҡикәттән ситкә тайпылмауға өлгәшә.

1957 йылда КПСС ҮК эргәһендәге Юғары партия мәктәбендә уҡый. 1957-1962 Саҡмағош райкомын етәкләй. 1962-1967 йылдарҙа - Өфө колхоз-совхоз етештереү идаралығында партком секретары һәм КПСС-тың Өфө райкомының беренсе секретары.

1967-1977 йылдарҙа - Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы секретары.

КПСС-тың XXII съезы делегаты, БАССР-ҙың 5-се, 7-се, 8-се, 9-сы саҡырылыштары депутаты. 1962-1967 йылдарҙа СССР Юғары Советының 6-сы саҡырылышы составында Милләттәр Советы депутаты. 1996 йылда вафат була. Улы Илдус Абдрахманов - БФА академигы.

Наградалары: I дәрәжә Ватан һуғышы (1985), "Ҡыҙыл Йондоҙ"(1944), Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы (1966) һәм "Почёт Билдәһе" ордендары, 9 миҙал менән бүләкләнгән.

2021 йылдың февралендә Межгорье ҡалаһының 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенә Барый Абдрахман улы Абдрахманов исеме бирелә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡыҙыл ҡарағат

Ҡыҙыл ҡарағат май-июндә сәскә ата, емеше 4-6 аҙнанан өлгөрә. Уның емешендә лимон, алма, шарап, салицил һәм гәрәбә кислоталары бар, шулай уҡ пектин матдәләре сығанағы. Калий, фосфор, кальций ҙа күп. Емеше тирләтеү, ҡанды туҡтатыу, бәүел ҡыуҙырыу көсөнә, витаминлы сифаттарға эйә.

❖ Арығанлыҡ, ауырығандан һуң иммунитет насарайған, күңел болғанған осраҡтарҙа көн һайын 1-әр стакан ҡыҙыл ҡарағат һутын эсергә.

## Лимон

❖ Бауыр ауырыуҙарынан 4 лимон һутын 4 баш һарымһаҡтан һығылған һутҡа ҡушып, ашағандан һуң 2 сәғәт үткәс, 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ 1 кг бал, 1 стакан зәйтүн майы, ит турағыстан үткәрелгән 4 лимонды (икәүһен әрсергә, икәүһен шул көйө) бергә ҡушырға. Ҡатышманы ауыҙы ябыҡ һауытҡа һалып, һыуытҡыста һаҡларға. Ашарҙан 30-40 минут алда көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Был дауа бауырҙың дауамлы ауырыуҙары булғанда кәңәш ителә.

## Һары сейә

Һары сейә (черешня) апрель-май айҙарында аҡ сәскә ата. Емештәре һары, ҡыҙыл, алһыу төҫтә була һәм июнь-июлдә, ҡайһы райондарҙа майҙа уҡ өлгөрә. Һары сейә емеше Р-әүҙем матдәләр һәм йодҡа бай. Дауаланғанда емешен ҡулланалар, улар дизентериянан бик яҡшы сара. Шулай уҡ емеше һәм унан яһалған һуты бәүел ҡыуҙырыу, ҡан тамырҙарын нығытыу, үт сығарыу сифаттарына эйә. Һутында йод күп һәм уны ҡалҡан биҙен дауалауҙа ҡулланалар.

❖ Глистар, геморройҙан ҡан килеү осрағында ярты литр һыуға 25 грамм һары сейә емешен бешереп, төнәтергә. Төнәтмәне 20-30 тәүлек дауамында төшкө аштан алда эсергә.

❖ Күҙ күреүе насарайғанда көн һайын 300-әр грамм һары сейә ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һунағара, йылан һары**
**(Змееяд)**



Йыртҡыс ҡоштар араһында оҙон аяҡлы булып күренә, сөнки аяҡтарының өҫтән бер өлөшө генә йөн менән ҡапланған. Һоро-көрән төҫтә, түше аҡһыл, йәки ҡара буй һыҙатлы ҡыҙғылт-көрән. Ҡайһы берәренең түшендә ҡара табы була. Ҡойроғо сағыштырмаса оҙон. Күҙҙәре һары, суҡышы һоро-көрән, тәпәйҙәре күкһел-һоро, тырнаҡтары ҡара. Өлкән ҡоштарҙың кәүҙә оҙонлоғо яҡынса 70 см, инә ҡош - 72 см, ҡанаттары йәйелгән килеш 160-190 см-ға етә.

Рәсәйҙең Ҡыҙыл китабына һирәк төр булараҡ индерелгән, Башҡортостанда ул тулыһынса юғалып барған төрҙәр төркөмөндә.

Һунағара йылан, кеҫәрткеләр, шулай уҡ кимереүселәр менән туҡлана. Ваҡ ҡоштарға һунар итә. Сарансаны ашай. Табышын тәгәйен еренә тәпәйенә тотоп түгел, ә суҡышына ҡабып оса. Йыландар әүҙем булған ваҡытта һунар итергә ярата.

Көньяҡ Уралға апрелдең икенсе яртыһында, хатта май башында осоп килә. Ояны урман ситендәге ағастарға ҡора, унан тирә-яҡ күренеп торорға тейеш. Инә ҡош 1, һирәгерәк 2 йомортҡа һала, айға яҡын сиратлап баҫалар. Бәпкәләрҙе лә икәүләп ашаталар. Бәпкә бәләкәй саҡта инә ҡош ризыҡты өҙгөләп бирә. Август урталарында йәш ҡош ояны ташлап оса, тик инәләренән айырылмай, ҡышлау урындарына ла улар бергә оса.

Был ҡоштар һаҡланып ҡалһын өсөн эре йыртҡыс ҡоштарға һаҡсыл ҡараш кәрәк. Әлбиттә, уларҙың иҫәбен арттырыу тураһында уйлау - ул хыял ғына, хәҙерге заман шарттарында был мөмкин дә түгел. Әммә шулай ҙа урындағы популяцияны әлеге иҫәбендә һаҡларға тырышырға кәрәк.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары"**
**китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ХӘТЕРЛӘП...

**Мәғлүм булыуынса, йыл һайын 12 июндә баш ҡалабыҙ Өфө көнөн билдәләү ныҡлы йолаға әүерелде. Ҡасан һәм нисек барлыҡҡа килгән һуң был дата? Ул йылдарҙа Өфө ҡала хакимиәтенең Мәҙәниәт идаралығы етәксеһе, Ҡала көнөн байрам итеү йолаһын ойоштороусыларҙың береһе Борис Андреевич ЛАРИОНОВ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# ҠАЛА КӨНӨ БАЙРАМЫ.

## Ул нисек барлыҡҡа килде?



**➔ БорисАндреевич, яңы байрам хаҡында уй кемдең башына килде һәм иң беренсе Өфө көнөнә әҙерлек нисек барҙы?**

- 1990 йыл ул ваҡыттағы Өфө мэры Михаил Зайцев мине ҡала Мәҙәниәт идаралығы етәксеһе вазифаһына эшкә саҡырҙы. Бик ҡыҙыҡлы йылдар ине ул ваҡыт: Рәсәй донъя даирәһен инләй, Көнбайыш тәжрибәләрен үҙләштерә һәм иҡтисадтан алып мәҙәниәткә тиклем бөтөн өлкәләрҙә лә бығаса булмаған яңы йолаларҙы индерә. Яңы урында эш башлап 3-4 ай үткәс, мине мэр саҡыртып алды һәм бөгөн ҡала көндәрен үткәреү модаға әйләнеүен белдереп, беҙгә лә Өфө көнөн булдырыу кәрәклеге хаҡында әйтте. "Өфө ҡасан барлыҡҡа килгән, нindәй көнгә йүнәлеш тоторға?" - тигән һорау бирҙе. Миңә яуындарҙы ғына һикертергә тура килде. "Әйҙә, шул эш менән шөғөлләнl!"- тип бойорҙо Зайцев.

**➔ Һәм һеҙ тура архивҡа йүнәлдегеҙме, эште нимәнән башланығыҙ?**

- Был мәсьәләлә беҙгә тыуған яҡты өйрәнеүсе ирле-ҡатынлы Гудковтар бик ныҡ ярҙам итте. Ул ваҡыттағы Фәндәр академияһының вице-президенты Раил Кузеевҡа ла мөрәжәғәт итергә тура килде. Шулай итеп, бер нисә дата аталды, һәм беҙ Рәсәй көнөнә - бөтә ил буйынса ял көнө булған 12 июнгә туҡталдыҡ.

**➔ Ә байрам сценарийын кем яҙҙы, сараның режиссеры кем булды?**

- Сценарийҙы мин ярҙамсым Вадим Осипов менән бергәләп яҙҙыҡ. Байрам сараһы ҡала Советы алдындағы майҙанда Өфө кремле тирәләй барырға тейеш ине. Тик күптән янып юҡҡа сыҡҡан кремлдең макетын эшләү ябай ғына мәсьәлә булып сыҡманы. Уны беҙгә билдәһеҙ авторҙар күҙ алдына килтереп ижад иткән гравюралар буйынса Художество фондында киндергә төшөртөп алдыҡ. Икенсенән, был бик ҡиммәткә төштө, әлбиттә, ләкин мэр быны өсөн аҡса йәлләмәне: тәүтапҡыр Өфө көнөнөң ҡала тарихында сағыу, матур һәм йөкмәткеле тамаша булып ҡалыуын бик теләй ине ул.

**➔ Шунан, тамаша нисек килеп сыҡты һуң? Мәскәүҙән ҡунаҡтар саҡырҙығыҙмы?**

- Тамашаның төп ваҡиғаһы - ул тарихтан билдәле ете башҡорт ырыуы вәкилдәренең Аҡ батшаға барымтасылар яуынан яҡлау һорап барыуҙары, ҡала-нығытма төҙөлөшөнә рөхсәт алыу ине. Театрлаштырылған был тамаша бик сағыу килеп сыҡты һәм йөҙәрләгән өфөлө иғтибарын йәлеп итте. Беҙгә быны өсөн бик тырышырға тура килде, әлбиттә: тарихи кейемдәр һыҙмаларын эшләп, 90-сы йылдарҙағы көрсөк заманда костюмдар тегеү өсөн тауар һатып алындыi. Уның ҡарауы, костюмдар иҫ киткес матур килеп сыҡты, ҡарап туймаҫлыҡ! Шәп концерт әҙерләнек: башҡорт һәм рус йыр-моң ынйыларынан төҙөлгән фольклор номерҙары, заманса эстрада сығыштарының һәр береһен тиерлек йыйылған халыҡ аншлаг менән оҙатты. Мәскәү менән Питерҙан артистар саҡырып торманыҡ, быны өсөн ул йылдарҙа продюсерлыҡ шөғөлө әллә ни үҫешеп етмәгәйне әле. Үҙебеҙҙең йондоҙҙар ҙа бына тигән сығыш яһаны. Ул ваҡытта "Мираҫ" ансамбле лә әле танылыу алмағайны, шуға ҡарамаҫтан, уның ойоштороусыһы - Приборҙар төҙөү заводының Мәҙәниәт һарайы директоры Геннадий Анищенко гүзәл сәнғәт ынйылары өлгөһө булырлыҡ коллектив бейеү композициялары ҡуя башлағайны. Ул ошо фольклор коллективының нигеҙен тәшкил иткән таланттарҙы республика буйлап бөртөкләп тигәндәй йыйҙы.

**➔ Өфө байрамына ситтән ҡунаҡтар саҡырыла инеме?**

- Мотлаҡ! Үҙебеҙҙең данлыҡлы шәхестәрҙән халыҡ шағиры Мостай Кәрим, ха-

ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ

# УҠЫТЫУСЫЛЫҠҠА БЕР АҘЫМ



**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында юғары һәм урта һөнәри белем биреү ойошмалары студенттарының "Әсә теле - 2024" тип аталған һөнәри оҫталыҡ конкурсына йомғаҡ яһалды.**

Ун йылдан ашыу тарихы булған был конкурс иң яҡшы студенттарҙы асыҡлау һәм уларға ярҙам итеү, шулай уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһының абруйын нығытыу маҡсатында йыл һайын уҙғарыла. Быйыл конкурстың Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы ярҙамында "Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү" дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә уҙғарылыуы ҡыуаныслы.

Ойоштороу комитетына Башҡортостан Республикаһының 4 юғары белем биреү ойошмаһынан һәм 7 урта һөнәри белем биреү ойошмаһынан 83 конкурс эше ҡабул ителде. Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы вәкилдәре, юғары, урта һөнәри белем биреү ойошмалары уҡытыусылары, дөйөм белем биреү ойошмалары уҡытыусылары ингән баһалама комиссияһы иң яҡшы 20 эште билдәләне һәм уларҙың авторҙарын конкурстың асыҡ этабына саҡырҙы.

Конкурстың асыҡ этабы дүрт турҙан торҙо: "Иң яҡшы дәрес/дәрестән тыш сара"; "Иң яҡшы теоретик"; "Буласаҡ уҡытыусы медиавизиткаһы"; "Педагогик ринг". Өфөнән Ф.Х. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында үткәрелгән беренсе турҙа студенттар дәрес үткәреү һәм анализлау өлкәһендә һөнәри оҫталыҡтарын күрһәтте. "Буласаҡ уҡытыусы медиавизиткаһы" этабы өсөн конкурсанттар үҙҙәренең ҡаҙаныштары, ҡыҙыҡһыныуҙары һәм шөғөлдәре тураһында видеоролик-презентацияларын тәҡдим итте. "Иң яҡшы теоретик" студенттарҙың башҡорт теле, әҙәбиәте һәм уларҙы уҡытыу методикаһы буйынса теоретик белемдәрен билдәләүгә йүнәлтелгәйне. "Педагогик ринг"та студенттар заманса белем биреүгә ҡағылышлы билдәле кешеләрҙән видеоһорау алыу формаһын ҡулланды. Баһалағанда жюри ағзалары буласаҡ педагогтың мәсьәләне аңлауын, уны асыуын, үҙ фекерен һәм дәлилдәр кимәлен иҫәпкә алды.

Үткәрелгән һынауҙар һөҙөмтәләре буйынса ике абсолют еңеүсе һайланды, улар: юғары уҡыу йорттары студенттары араһында Аҡмулла университетының башҡорт филологияһы факультеты студенты Лилиә Дусмәтова (етәксеһе - Гөлфиә Дәүләтколова) һәм Б.М.Мәмбәткәлов исемендәге Сибай педагогия колледжының 4-се курс студенты Гөлдәниә Вәлиева (етәксеһе - Гөлнара Шакирова). Улар Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығының Почет грамотаһы һәм 25 мең һумлыҡ бүләк карталары менән бүләкләнде.

**Алина ҒӘЛЛӘМОВА,**
**М.Аҡмулла исемендәге БДПУ студенты.**

✓ *Ҡала мэрияһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 12 июнь Дуҫлыҡ монументында 1974 йылда һалынған ваҡыт капсулаһын урынынан алып, уны асыу тантанаһы буласаҡ.*



лыҡ рәссамы Борис Домашников, атҡаҙанған скульптор Николай Калинушкин, композитор Заһир Исмәғилов һәм башҡалар. Михаил Алексеевич Зайцев күрше Силәбе, Ырымбур, Пермь ҡалалары мэрҙарын саҡырҙы. Хатта Татарстан президенты Минтимер Шәймиев та килеп еткәйне, улар Мортаза Рәхимов менән байрам майҙансыҡтарын ҡарап йөрөнөләр. Салют та булды.

➔ **Ҙур байрамдар, гәҙәттә, мажаралаһыҙ үтмәй торған, бер заман шулай һыбайлылар парадында ла ниндәйҙер хәл булып алғайны түгелме ?**

- Элек ҡала байрамдарын үткәргәндә парадтар маршы була торғайны. Шулай бер йылды (был КПСС заманында уҡ әле) бөтөн республиканан йыйылған 120 һыбайлы парады бара. Иң алда, әлбиттә, генерал Шайморатов булып кейенгән һыбайлы легендар шәхес хаҡындағы йыр оҙатыуында килә. Ҡапыл уның аты ниմәгәләр әләгеп йығылды ла ҡуйҙы. Бәхетиһен, атты асфальт юлға ярашлы итеп дағаламаған булып сыҡтылар. Ни эшләргә? Шул саҡ Әбйәлил районынан килгән һыбайлы бер ҙә юғалып ҡалманы: атынан һикереп төштө лә, йүгәнде "генерал"ға тотторҙо. Тегеһе атҡа һикереп мендe лә, "Алға!" тип ҡысҡырып, парадҡа команда бирҙе һәм марш бер ни булмағандай юлын дауам итте. Ә минең ҡот "табанға" төшкәйне инде. Аҙаҡтан Мәскәүҙән килгән ҡунаҡтар - партия Үҙәк Комитеты хеҙмәткәре менән Пушкин исемендәге театрҙың баш режиссеры Гоголев мине ҡамап алдылар ҙа: "Нисек итеп һеҙ был сәхнәне шулай тәбиғи һәм ышаныҙырлыҡ итеп бирә алдығыҙ?" - тип төпсөнөп, йәнемде ҡыйып бөттөләр.

Тантаналы марш, тигәндән, тынлы инструменттар оркестры парадын да ярата ине халыҡ. Спорт һарайынан алып ҡала Советына тиклем торбасылар, барабансылар дәртле марш көйҙәрен уйнап, йәйәүләп Ленин һыҡәленә килеп етәләр ине. Өфө байрамында ана шундайҙарҙан 12 марш-парад үткәрҙек. Бындай парадтарҙы иң тәүҙә партияның Башҡортостан өлкә комитеты секретары Миҙхәт Шакиров Латвия баш ҡалаһы Рига байрамында күреп ҡайтҡан һәм шундай уҡ сараны Өфөлә лә үткәрергә тәҡдим иткәйне. Беҙ, бер төркөм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре һәм музыканттар, ошо тәжрибәне өйрәнеү маҡсатында хатта Риганың үҙенә лә барып ҡайттыҡ һәм бик оҡшаттыҡ. Мин бөгөн ошо музыкаль традицияны тергеҙеү хыялы менән янам. Был, берҙән, халҡыбыҙ, айырыуса йәштәребеҙ күңелен илһөйәрлек тойғоһо менән байытыр, патриотик йыр-көйҙәребеҙгә иғтибар һәм ихтирам уятыр ине.

➔ **Борис Андреевич, һеҙ байтаҡ йылдар буйы урам һәм ҡала майҙандары байрамдары үткәреп, Өфө халҡын, баш ҡала ҡунаҡтарын ҡыуандырған кеше булараҡ, бөгөн ниндәй хәтирәгеҙҙе айырыуса йылылыҡ менән иҫкә алаһығыҙ?**

- Күп нәмә иҫкә төшә, әлбиттә. Шул йылдарҙа миңә сәнғәтте, баш ҡалабыҙ Өфөнө яратҡан күренекле мәҙәниәт әһелдәре менән бергә эшләү бәхете тейгәне өсөн яҙмышыма рәхмәтлемен. Геннадий Анищенконың "Мираҫ" ансамбле хаҡында алдараҡ әйтеп киткәйнем инде. Ул ысын мәғәнәһендә үҙ эшенең фанаты ине. Алыҫ башҡорт ауылдарына барып, халыҡтың нисек бейегәнен күҙәтеп, йыр-моңдарын, халыҡ йолаларын өйрәнеп, яҙҙырып алып йөрөр булды һәм аҙаҡ ҡайтып, төрлө бейеү композицияларын ҡуйғанда шуларҙы файҙаланды. Уға хатта легендар балетмейстер Игорь Моисеев та кәңәштәр һорап йыш мөрәжәғәт иткән, был турала күпселек белмәй ҙә хатта. Йәл, шундай шәхестәребеҙ онотола бара... Унан һуң, "Мираҫ"ты ҡабул итеп алған шәп балетмейстер Валерий Степанов та был коллектив менән эшләп, бай мәҙәни мираҫ ҡалдырҙы. Үкенескә, ул да донъянан иртәрәк китеп барҙы. Ошо ике шәхестең дә Өфө тарихында исемдәрен мәңгеләштереү кәрәк, тип уйлайым, улар бындай ихтирамға бик тә лайыҡлы: Башҡортостан сәнғәтен аҫыл бейеү өлгөләре менән байытыуға күп көс һалдылар.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

## ҮТКӘНДЕҢ КИЛӘСӘККӘ ТАУЫШЫ

**Ҡала мэрияһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 12 июнь Дуҫлыҡ монументында 1974 йылда һалынған ваҡыт капсулаһын урынынан алып, уны асыу тантанаһы буласаҡ.**

Ваҡыт капсулаһы киләһе быуындарға бынан 50 йыл элек, баш ҡалабыҙҙың 400 йыллығы байрамында һалып ҡалдырылған булған. Был идеяны ҡаланың ул саҡтағы комсомол комитеты секретары Валерий Ижорский тәҡдим иткән. Капсула ярты мертлап оҙонлоғондағы төргәкте хәтерләтә. Ул Башҡортостанда ҡойолған суйын корпусҡа һалып ҡалдырылған.

Өфөнөң 400 йыллығы исемендәге сквер һәм ундағы капсула тарихы ул ваҡыттағы Өфө ҡала Советы башҡарма комитеты рәйесе Әҙһәм Вәлиев тырышлығы менән бойомға ашырыла. "Капсулаларға мода" СССР-ҙа йыһанды яулау һәм тәүге космонавтар менән бергә килде. Капсула идеяһын Мәскәү комсомолдары башлап ебәргән, тинеләр һәм аҙаҡ ул бөтә илгә тарала. Киләсәк быуындарға металл эсенә һалып ҡалдырылған мөрәжәғәт төрлө уңайҙар менән башҡарыла башлай: яңы производство, союз магистралдәре, ҡалалар һәм ҡасабалар төҙөүгә арнала улар. Өфөгә лә килеп етә был идея. Ҡала комсомолы Вәлиевҡа был тәҡдим менән 1974 йылдарҙа уҡ мөрәжәғәт итә. Вәлиев был проектты хуплап ҡабул итә. Партияның ҡала комитеты секретары Сергей Воронинскийға ла оҡшай тәҡдим, һәм улар икәүләп партия өлкә комитетының беренсе секретары Миҙхәт Шакировҡа был турала еткерергә ашығалар. Ләкин ҡырыҫ холоҡло һәм үҙһүҙле беренсе секретарь Миҙхәт Закир улы: "Юҡ менән булмағыҙ!"- тип ҡырт киҫә. Бына ни өсөн ул йылдарҙағы гәзит һандарында капсула хаҡында хәбәрҙәр юҡлығы хәҙер аңлашыла. Һуңынан, һөйләүҙәренсә, Миҙхәт Шакиров һыуына төшә һәм инструкторы аша капсула һалыуға ризалығын биргә лә, был хаҡта артыҡ шаушыу ҡуптармаҫҡа ҡуша. Ләкин Өфөнөң буласаҡ юбилейы беҙгә туған баш ҡалабыҙҙың тарихын, үҫеш этаптары һәм йүнәлештәрен һәм иң мөһиме - йәш быуындарға үткәндәрҙең нимә васыят итеп ҡалдырғанын белергә һәм йәмғиәтебеҙ һүҙен - хәтерен улар күңеленә еткереү бурысын ҡуя.

...Һәм бына беҙ юбилей йылына аяҡ баҫтыҡ. Был хаҡта китаптар яҙыла, конкурстар, фестивалдәр, күргәҙмәләр әҙерләнә, юбилей төҙөлөштәре үҫеп сыға. Ярты быуат элекке кеүек уҡ, тантананы көҙ, уға халыҡ-ара форумдарҙы һәм донъя чемпионаттарын тап килтереп үткәреү ҡарала. Өфөгә юғары федераль ҡунаҡтарҙың килеүе көтөлә. Тик шуға ышаныс килә: йәштәрҙе һәм мәктәп уҡыусыларын саҡырып, тарихи капсуланы асыу тантанаһы рәсми ваҡиғалар теҙмәһендә юғалып ҡалмаһын, ә, киреһенсә, тантананың иң юғары нөктәһе булып, һүҙҙә түгел, ғәмәлдә илһөйәрлек тәрбиәләү өлгөһөнә әүерелһен ине.

**Галина ИШМӨХӘМӘТОВА.**
**"Уфа" журналынан.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



## ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

16-сы гв. атлы дивизияһы рядовойҙарының һәм командирҙарының ҙур төркөмө корпус командованиеһының 1945 йылдың 19 мартындағы бойороғона ярашлы I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы ордендары менән бүләкләнә. Был наградаларға яугирҙар Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһы барышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн лайыҡ була. I дәрәжә Ватан һуғышы ордены кавалерҙары: 60-сы гв. атлы полкының 3-сө эскадроны ҡылыссыһы, гв. рядовойы Сәлимгәрәй Әхмәтгәрәев (Туймазы районынан). Ул Томашув-Мазовецки һәм Калиш ҡалалары өсөн барған алыштарҙа тәүге рәттә бара, Пилица йылғаһын беренселәрҙән булып кисеп сыға. Калиш ҡалаһы янындағы шоссе юлында 10 дошман һалдатын юҡ итә, үҙе лә батырҙар үлеме менән һәләк була; шул уҡ эскадрондың станковый пулемет расчеты командиры, гв. сержанты Атауллин Заһит (Белорет районы башҡорто), элегерәк III дәрәжә Дан ордены менән бүләкләнгән яугир, 1945 йылдың 18 ғинуарында үҙенең расчеты менән Пилица йылғаһы аша сыға һәм шундуҡ дошман менән тиңһеҙ алышҡа инә. Уның расчеты немецтарҙың өс пулемет расчетын сафтан сығара. Батыр яугир ошо алышта һәләк була; шул уҡ эскадрондың пулемет расчеты командиры Иван Николаенко, милләте буйынса белорус (Башҡорт АССР-ының Архангел районынан). Пилица йылғаһы аша сығыу менән дошман траншеяһына бәреп инә, немецтарҙың бер взводҡа яҡын һалдатын юҡ итә. Ул эскадрон составында Томашув-Мазовецки ҡалаһының үҙәк өлөшөндә ҡыйыу алыша; 60-сы гв. атлы полкының отделение командиры, гв. өлкән сержанты Иван Абрамцов (Орел өлкәһенең Трубчев районынан). Ул үҙенең һалдаттары менән Пилица һәм Варта йылғаларын кисеп сыҡҡанда, Томашув-Мазовецки, Лодзь, Калиш ҡалалары өсөн барған алыштарҙа унышлы хәрәкәт итә, байтаҡ дошман һалдаттарын һәм офицерҙарын сафтан сығара. 29 ғинуарҙа батырҙарса һәләк була; 60-сы гв. атлы полкының 1-се эскадронының взвод командиры, гв. өлкән лейтенанты Николай Агапитов (Ҡаҙаҡ ССР-ы Павлодар өлкәһенән). 1945 йылдың 18 ғинуарында үҙенең взводы менән Пилица йылғаһын беренселәрҙән булып кисеп сыға, дошман траншеяһын алғанда уның бер взводҡа яҡын һалдатын юҡ итә. 29 ғинуар көнөндәге ҡаты алышта батырҙарса һәләк була.

Корпус командованиеһының ошо уҡ (1945 йылдың 19 мартындағы) бойороғо буйынса II дәрәжә Ватан һуғышы ордендарына лайыҡ булыусы яугирҙар: 20-се гв. ПВО дивизионы тоҫҡаусыһы, гв. кесе сержанты Сергей Выдрин (Дүртөйлө районы, Йәлдәк ауылынан). 20 ғинуарҙа Поддемблино ауылы янында дошмандың истребитель авиацияһы беҙҙең позицияларҙы штурмлай башлағас, бомбалар шартлауына, пулемет утына ҡарамай, немец самолеттарын беренсе булып утҡа тота. Боевой посында һәләк була; шул уҡ дивизиондың ДШК зенит пулеметы расчеты командиры Захар Денисов (Өфө ҡалаһынан). Элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булған. Томашув-Мазовецкиға һөжүм иткәндә пулемет уты менән дошмандың ике ут нөктәһен баҫтырып, 58-се гв. атлы полкы подразделениеларына алға табан хәрәкәт итеү мөмкинлеген бирә; 60-сы гв. атлы полкының 3-сө эскадронының станковый пулемет тоҫҡаусыһы Балли Дурдыев, (Төркмән ССР-ы, Бахарды районынан).

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

## МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**"Әмди - киҫәксә, уның мәғәнәһе "хәҙер" тигәнде белдерә. Әйтәләр: "әмди келдим". Мин хәҙер килдем. Уғыҙҙар әлифте касра менән әйтә: имди.**

**Әйтелгән: "Өпкәм келип оградым, арсланлайы көкрәдим, алплар башин тоградым, әмди мени ким тутар".**

**Бында былай тиелгән: "Мин дошманға ярһып, нәфрәт менән ташландым, мин арыҫлан кеүек ырылданым, батырҙарҙың башын өҙҙөм һәм халыҡ араһында ҡысҡырҙым: "кем мине [хәҙер] тотор?"**

"Әмди" киҫәксәһе хәҙерге башҡорт телендә ҡулланылмай. Әммә борონғо башҡорт (төрки) әҙәбиәте ҡомартҡыларын әҙәби башҡорт теленә күсергәндә ошо һүҙҙең уғыҙҙар бынан мең йыл әүәл ҡулланған "имди" варианты яҡын булған "имде" һүҙе ҡулланыла икәнен аңларбыҙ. Ҡол Ғәлиҙең "Кисса-и Йософ" дастанынан бер строфаны миҫал итеп килтерәйек:

"Йософтоң ниндәй хәлдәр үткәргәнен,
Кәрҙәштәре Йософҡа ни күрһәткәнен,
Мысырҙа батша булып көн иткәнен
Назым менән әйтәйем - тыңла имде".

Миненсә, ошо "әмди" йә иһә "имди" урынына хәҙерге башҡорт телендәге "инде" һүҙе тап-таман килә. Әл Ҡашғариҙың өҫтә килтергән шиғри дүрт юллығы хәҙерге башҡорт телендә ошолайыраҡ яңғырар ине:

"Үпкәм килеп ураным, арыҫландай күкрәнем, алптар башын тураным, инде мине кем тотар?" Йәнә боронғо "өпкә" (үпкә) һүҙенең башҡорт телендә яңы семантик мәғәнә алып, уның әүәлге асыуҙы, нәфрәтте белдергән мәғәнәһе юҡҡа сыҡҡан: ул телебеҙҙә бары рәнйеү, йәберһенеү тойғоһон ғына аңлата.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

***✓ Исеме унан бер нисә саҡрымда Ағиҙелгә ҡушылған Өфө йылғаһы менән бәйле. Күрәһең, бында ҡәлғә төҙөргә килгән стрелецтар тап ошо урында рустар килгәнгә тиклем үк административ үҙәк булғанын белгән.***

# ӨФӨ

## йәки Үткән замандан -

**Бөгөн "Киске Өфө" ҡунағы - тарих фәндәре докторы, Өфө фән һәм технологиялар университеты профессоры Булат Әхмәр улы АҘНАБАЕВ. Әңгәмәбеҙ баш ҡалабыҙҙың 450 йыллыҡ юбилейына арнала.**

**Булат Әхмәр улы, әңгәмәбеҙҙе ситтәнерәк башлайыҡ әле. Ата-бабаларыбыҙ Башҡорт иленең бер юлы өс йылғаһын "Иҙел" атамаһы менән нарыҡлаған: Ағиҙел, Ҡариҙел һәм Күгиҙел. Һуңғыһы - хәҙерге Дим йылғаһы. Шуныһы ҡыҙыҡ, ана шул Ҡариҙелебеҙҙе ҡасандыр Өфө тип атай башлағандар: XVI быуат аҙаҡтарында рус стрелецтары бында ҡәлғә төҙөргә килгәс, уны "Уфимская крепость", тип атайҙар. Уйлап ҡараһаң, быңдай хәл бик сетерекле тойола. Һеҙ ошо этимологик проблеманы нисек аңлатыр инегеҙ?**

- Ғөмүмән, гидронимдың ойконим атамаһына күсеүе - бик һирәк күренеш. Киреһенсә, ҡала исеме менән йылғалар атала. Мәҫәлән, Воронеж ҡалаһы янынан аҡҡан йылға ла ҡала исеме менән Воронеж тип атала. Нисек кенә булмаһын, баш ҡалабыҙ Өфө йылғаһы исемен алған. Үҙ заманында төбәктең беренсе тарихсыһы П.И. Рычков та ("Топография Оренбургская" китабының авторы, 1752 - 1755 йылдарҙа яҙылған) аптырашта ҡала: Өфө ҡалаһы Ағиҙел йылғаһы (русса тәүҙә - Белая Воложка, һуңынан - Белая) буйында урынлашҡан, ә исеме унан бер нисә саҡрымда Ағиҙелгә ҡушылған Өфө йылғаһы менән бәйле. Күрәһең, бында ҡәлғә төҙөргә килгән стрелецтар тап ошо урында рустар килгәнгә тиклем үк административ үҙәк булғанын белгән.

Яңыраҡ арабыҙҙан киткән тарихсы, профессор Вадим Винцерович Трепавлов үҙенең "Ногайская орда" тигән китабында Башҡортостандың Нуғай Урҙаһы составында айырым административ берәмек булыуын раҫланы. Нуғай Урҙаһы өс өлөшкә бүленгән. Беренсеһе - баш ҡалаһы Сарайчик булған үҙәк, унда оло бей Нуғай Урҙаһы кенәзе ултырған; икенсеһе, уң ҡанаты - көнбайышҡа Волга йылғаһына тиклемге өлөш; өсөнсөһө, һул ҡанаты - Һырдарья йылғаһына тиклемге өлөш. Башҡорт ерҙәре урҙаның бер өлөшөнә лә инмәй, ул, айырым административ берәмек буларак, билдәле кимәлдә автономия хоҡуғына эйә була. В.В. Трепавлов яҙыуынса, Нуғай Урҙаһы менән идара итеү үҙенсәлекле була. Урҙаның баш ҡалаһы Сарайчикта бөйөк кенәз, оло бей (беклярбек) Едигей (башҡорттарҙа - Иҙеүкәй) ултыра, һул ҡанатта улы - Кей-Кавад, уңда - улы Нураддин. Ә бына Башҡортостан өсөн айырым идарасы - наместник тәғәйенләнә. Идара итеү үҙәге хәҙерге Өфө биләмәһендә урынлаштырыла, тимәк, рустар килгәнгә тиклем бында ҙур административ үҙәк була. Был үҙәк XVI быуат баштарына тиклем йәшәй.

**Өфө биләмәһе ерлегендә элек-электән башҡа тораҡ пункттар булыуы билдәле. XVI быуаттың икенсе яртыһында воевода Михаил Нагой етәкселегендә рус дружинаһы килгән саҡта хәҙерге Өфө ҡалаһы үҙәге урынлашҡан ерҙә бер кемдең дә йәшәмәгәне раҫ. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Был мәсьәлә бигүк ябай түгел ул. Һорауға икенсе бер һорау менән яуап бирер инем. Ни өсөн Өфө ҡәлғә-ҡалаһының ҡасан нигеҙләнеүе хаҡында ике төрлө мәғлүмәт барлыҡҡа килгән? Беренсе дата - 1574 йыл. Өфө ҡалаһының 450 йыллыҡ юбилейы ошо дата менән бәйләп байрам ителә. Икенсеһе - 1586 йыл. Был фактты нисек аңлатырға була? Бынан тап 150 йыл элек - 1874 йылда тәү башлап Өфө ҡалаһының 300 йыллыҡ юбилейын билдәләү мәсьәләһе ҡуҙғатыла. Ул саҡтағы Өфө ҡала думаһы башлығы Дмитрий Волков датаны асыҡлау маҡсатында тарихсыларҙан махсус комиссия төҙөй, уның эше өсөн аҡса ла бүлә. Комиссияға ҡала-ҡәлғәнең 1574 йылда нигеҙләнеүе хаҡындағы документтарҙы эҙләп табыу бурысы йөкмәтелә. Тыумыштары менән Өфөнән булып, Рәсәй баш ҡалаһында йәшәгән күренекле ғалимдар йәлеп ителә. Шуларҙың береһе - Петербург академияһы академигы, тарихи архивтар белгесе Петр Пекарский була. Ул үҙенең яҡташтарының һорауын кире ҡаҡмай, байтаҡ ваҡыт Петербург һәм Мәскәү архивтарының XVI быуатҡа ҡараған тарихи документтарын тикшерә. Уның яуабы ҡәтғи була - Өфө ҡалаһы хаҡында тик бер генә мәғлүмәт табыла, ул 1586 йыл менән билдәләнгән. Тап шул йылда Нуғай Урҙаһы бейе Урус Иван Грозныйҙың улы Федор Иоановичҡа ультиматум рәүешендәге мөрәжәғәт ебәрә. Ул рустарҙың бөйөк кенәзенә Нуғай ҡулы аҫтындағы ерҙәрҙә төҙөлгән 4 ҡаланы юҡҡа сығарып, ташлап китергә ҡуша. Әммә документта ҡалаларҙың исемдәре теркәлмәгән, уның урынына ҡайһы йылға буйында төҙөлөүҙәре хаҡында әйтелә: Белая Воложкала (Ағиҙелдә), Өфө йылғаһында, Үҙәндә (Һарытау өлкәһендә) һәм Һамарҙа. Урҙа бейе Урус Башҡортостанда бер юлы ике рус ҡәлғәһе төҙөлөү менән риза булмауын белдерә.

Тарихсылар был проблемаға әлегә тиклем асыҡлыҡ индерә алманы. Нуғай бейе яңылышҡандыр, тигән версия ла бар. Әммә Урҙа бейҙәренең үҙ ҡулдары аҫтындағы ерҙәрҙе белмәүе мөмкин булмаған хәл. Башҡорт ырыуҙары Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң да Нуғай бейҙәре башҡорт ерҙәрен үҙҙәренеке тип иҫәпләй, Башҡортостан наместнигы ставкаһы Эмба ҡалаһына күсә, халыҡтан яһаҡ йыйыу дауам итә. Ошо заманда Оло Нуғай Урҙаһы бейҙәренән Урус бейҙе (1578-1590), Ураз Мөхәммәд бейҙе (1590-1598), наместниктарҙан Исмаил бей улы Динбай мырҙаны (1578-1584), Сәйет-Әхмәт мырҙаны (1584-1587) атап үтеү урынлы. Башҡортостанда Нуғай наместниктары власы 1634 йылға тиклем һуҙыла.

**Тарихсы буларак, Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыуҙың ни өсөн ике даталы булыуы хаҡында һеҙҙең үҙегеҙҙең фаразығыҙ бармы?**

- Әлбиттә. Был төбәккә башҡорттарҙың һорауы буйынса ысынлап та 1574 йылда стрелецтар командаһы һәм төҙөүсе-оҫталар килә. Әммә ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында ҡала тиклем ҡаланы, йәғни, административ идара үҙәген төҙөп бөтөп булмай. Беренсе нәүбәттә хәрби ҡәлғә төҙөлә, ул үҙенә күрә һаҡ посы ролен үтәй. XVI быуаттың 70-се йылдарында Рус дәүләтенә нуғайҙар көньяҡтан йыш ҡына сапҡындар эшләп, һөжүм итеп тора, ҡәлғә гарнизоны уларҙы тотҡарлап та торор һәм ваҡытында үҙәккә хәбәр ебәрә алыр ине. Ул заманда Рәсәйҙе Себер һәм Азия илдәре менән тоташтырған берҙән-бер юлда Өфө ҡәлғәһен төҙөү үтә мөһим була. Ошо магистралде контролдә тота алыу дәүләт кимәлендәге бурыстарҙың береһе буларак ҡабул ителә. Әйтергә кәрәк, тәүге йылдарҙа яңы ғына төҙөлә башлаған ҡәлғәне символик мәғәнәләге хәрби пункт тип атау раҫтыр: уның даими воеводаһы ла, ҙур гарнизоны ла булмай әле. Ҡәлғә административ яҡтан да, иҡтисади бәйләнештәр буйынса ла бер ниндәй ҙә роль уйнамай. 1577 йылда Оло Нуғай Урҙаһының баш ҡалаһы Сарайчикты рус кенәзе Серебряныйҙың ғәскәре баҫып ала, Урҙа тамам сәйәси бөлгөнлөккә төшә. Күрәһең, дала тынысланыбыраҡ ҡалғас, Өфө ҡәлғәһе гарнизоны ла Мәскәү тарафтарына ҡайтып китә.

Миңә бик һирәк осрай торған сығанаҡтарҙың береһе - XVI быуатта рус ҡалаларын төҙөү тураһындағы йылъяҙма (летопись) менән танышырға тура килде. Был йылъяҙмаға Михаил Афанасьевич Нагой хаҡында "...был послан доставить Уфу", тигән мәғлүмәт теркәлгән. Тимәк, воевода Нагой Өфөнө төҙөп бөтөрөргә ебәрелгәс, ул килгәнгә тиклем үк бында ҡәлғә төҙөй башлағандар, әммә ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында төҙөлөш тамамланмай ҡала. Әлбиттә, 1574 йыл хаҡында һүҙ йөрөтөп була, ошо хаҡта Ырымбур экспедицияһының тәүге етәксеһе Иван Кириллович Кирилов, бер Өфө кешеһе биргән мәғлүмәткә нигеҙләнеп, Өфө ҡәлғәһенең Иван Грозный заманында төҙөлә башлауы хаҡында белдергән. Башҡа бер документ та табылмаған, ә Кирилов беҙҙең төбәккә 160 йыл үткәс кенә килә.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында Өфө башлығы "Дмитрий Волков фонды" составында Өфө Дворяндар йыйылышының ҡайһы бер документтары һаҡлана. Шулар араһында 1874 йылға - Өфөнөң юбилей йылына ҡарағандары ла бар. Уларҙың береһендә дума дьягы Иван Артемьевтың 1574 йылға тиклем үк башҡорттарҙың үтенесе буйынса ике мәртәбә ошо төбәккә урындағы халыҡ менән һөйләшеүҙәр уҙғарырға килеүе хаҡында бәйән ителә. Иван Артемьев башҡорттарҙың ҡайһы урында рус ҡәлғәһе өсөн ер бүлеп бирергә риза булыуҙары менән ҡыҙыҡһына. Килешеү ни өсөн кәрәк булған? Ул заманда башҡорттарҙың үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғы тейелгеһеҙ була, буйһондоролған халыҡтарҙың ерҙәре, киреһенсә, батшалыҡ милке итеп иғлан ителә. Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында ташлап кителгән, йә иһә халҡы үлеп-ҡырылып бөткән (выморочные земли) ерҙәрҙә генә дәүләт үҙенә алған.

Тағы ла бер миҫал: 1720 йылда Петр I "Тау хоҡуғы"н иғлан итә. Был хоҡуҡҡа ярашлы, кем ҡайҙандыр руда таба, шул ерҙә шәхсән руда сығара ала, бер кемдең ризалығы ла, рөхсәте лә кәрәкмәй. Тик был хоҡуҡ Башҡортостанға ҡағылмай: башҡорттар руда сыҡҡан ерҙәрен үҙ ризалыҡтары менән һатыу хоҡуғына эйә була. Йәнә 1754 йылда императрица Елизавета Петровна заводтар төҙөү өсөн башҡорт ерҙәренең тартып алынмаясағы хаҡында белдерә, заводчиктарға урындағы башҡорттар менән килешеү нигеҙендә эш итергә бойорола. Шулай булғас, Өфө ҡалаһын төҙөй башлау башҡ-



***1720 йылда Петр I "Тау хоҡуғы"н иғлан итә. Был хоҡуҡҡа ярашлы, кем ҡайҙандыр руда таба, шул ерҙә шәхсән руда сығара ала, бер кемдең ризалығы ла, рөхсәте лә кәрәкмәй. Тик был хоҡуҡ Башҡортостанға ҡағылмай: башҡорттар руда сыҡҡан ерҙәрен үҙ ризалыҡтары менән һатыу хоҡуғына эйә була. Йәнә 1754 йылда императрица Елизавета Петровна заводтар төҙөү өсөн башҡорт ерҙәренең тартып алынмаясағы хаҡында белдерә, заводчиктарға урындағы башҡорттар менән килешеү нигеҙендә эш итергә бойорола.***

***✓ Ҡаҙан тарихсыһы Николай Черпов бына нисек яҙа: "Рәсәй империяһында башҡа бер халыҡтың да, башҡорттарҙыҡы кеүек, шундай привилегиялары булмаған". Шуларҙың иң әһәмиәтлеһе - аҫабалыҡ хоҡуғы.***



# СЕРҘӘРЕН АСА, киләсәккә

**_Аҫабалыҡ быуындан-быуынға күсә барған. Халҡыбыҙҙа шәжәрәңде белеү - мотлаҡ талаптарҙың береһе. Бәғзе ғалимдарыбыҙ быны сағыштырмаса яҡын туғандарҙың бер-береһе менән никахлашыуын булдырмау сараһы ғына итеп ҡарай. Минеңсә, бында иҡтисади, милки мөнәсәбәттәр мөһимерәк. Шәжәрә - аҫабалыҡҡа хоҡуҡтың генеалогик нигеҙе. Миҫал өсөн: ситтә күп йылдар йәшәгән һәм унда вафат булып ҡалған башҡорттарҙың тоҡомдары әүәл ата-бабалары йәшәгән төйәккә кире ҡайтһа, улар үҙҙәренең аҫабалыҡ хоҡуғын ана шул быуындар ағаһы - шәжәрә аша раҫлай алған._**

орттарҙың ризалығы менән ғәмәлгә ашырыла.

Шуныһы ғәжәп: бында рус ҡала-ҡәлғәләрен төҙөү принциптары ла боҙола, сөнки башҡа урындарҙа бер ҡала менән икенсеһенең араһы 50-100 саҡрымдан артмаҫҡа тейеш. Ә Өфө - алыҫта, көнсығышта берҙән-бер ҡәлғә, Ҡаҙанға тиклем 600 саҡрымдан ашыу. Был дошман һөжүмдәрен кире ҡағыу өсөн бик унайһыҙ һәм хәүефле. Әммә башҡорттар үҙҙәре теләгәс, батша Иван Грозный ризалыҡ белдерә. Өфө ҡәлғәһе XVI быуаттың икенсе яртыһында Евразияла төҙөлгән иң бәләкәй рус ҡалаһы, шул уҡ ваҡытта төҙөлгән Һарытау, Һамар ҡәлғә-ҡалалары майҙаны буйынса Өфөнән 3-4 тапҡырға ҙурыраҡ. Өфө гарнизоны 300-350 кешенән артмаҫҡа тейеш була. Әммә батша хөкүмәте менән килешеүҙәр нигеҙендә ҡәлғәне дошман һөжүменән башҡорттарҙың үҙҙәренә лә һаҡлау бурысы ҡуйыла. Әйтергә кәрәк, башҡорттар түләй торған яһаҡты тап Өфөлә йыя башлау ҡуҙаллана. Шуға тиклем йыйылған яһаҡ ҡыш көнө Ҡаҙанға алып барыла, юлдар юҡ, был башҡорттарға ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра.

Төҙөлә башлаған ҡәлғәнең оҙаҡ йылдар буш ултырыуының үҙ сәбәптәре булған: Рәсәй Ливон һуғышы менән мәшғүл, төҙөлөш өсөн сығымдар ҙа етерлек булмай. Бындай мөмкинлек 12 йылдан һуң, Ливон һуғышы тамамланғас ҡына хасил була - ана шунан Өфө ҡәлғәһен төҙөп бөтөрөү өсөн Михаил Нагой 1586 йылда бында яңынан килә, тип һығымта эшләргә ерлек бар.

**Булат Әхмәр улы, Өфө ҡәлғә-ҡалаһы төҙөлөшөндә башҡорттарҙың да ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәттәр бармы?**

- Бар ундай мәғлүмәттәр, улар документаль акттарҙа сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, төҙөлөштә ҡатай һәм һалйот ырыуҙары башҡорттарының ҡатнашыуы хаҡында мәғлүмәт табылған. Был башҡорттар Себер яғынан күсеп килеүселәрҙән. Бына нисек булған ул. Бөйөк кенәз Едигер рус власын таный һәм Рәсәй менән яҡшы мөнәсәбәттәр урынлаштырырға уйлай. Әммә Себергә Бохаранан Күсем хан килә һәм власты үҙ ҡулына ала. Ул Мәскәүгә ҡаршы сәйәсәтте өҫтөн күрә. Едигерҙы үҙҙәренең ханы итеп таныған һәм унан ваз кисмәгән ҡатайҙар һәм һалйоттарға Күсем хан нәүкәрҙәренән ҡырылып бөтөү хәүефе яный. Улар, ошоғаса төйәк иткән ерҙәрен ташлап китеп, Урал һырты аша көнбайышҡа йүнәлә.

Тарихи сығанаҡтарҙа ошо башҡорттарҙың Өфө ҡәлғәһен төҙөүҙә күрһәткән хеҙмәттәре иҫкә алына. Айырып әйткәндә, юлбашсылары Шөгәр Күккүҙев (документтарҙа - Шугурка Кукузов) етәкселегендә тәүге гарнизонды тап улар аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеп торған. Әйткәндәй, Өфөнөң Шугуровка йылғаһына исем ана шул билдәле башҡорт Шөгәр Күккүҙев хөрмәтенә бирелгән.

1591 йылда (ҡәлғә нигеҙләнеүҙән һуң 5 йыл үтеүгә) яҙыла башлаған "Окладная книга по Уфе" тигән тарихи сығанаҡта ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "Все земли вокруг Уфы распаханы шугуровцами-татаровьями". Бында ошоға иғтибар итеү фарыз: "служилый татар" статусын йөрөткән хәлдә лә, уларҙың башҡорттар булыуына шик юҡ.

**Бында башҡорттарҙың борон-борондан билдәле бер шарттарҙа ябай эште түгел, хәрби хеҙмәтте өҫтөн күреүҙәрен иҫәпкә алырға кәрәктер...**

- Тап шулай. Рус дәүләте составында, килешелгән күләмдә яһаҡ түләүҙән башҡа, аҡ батша саҡырыуы менән башҡорттар хәрби хеҙмәт бурысларын үтәргә тейеш була. Сыуаштар ҙа батша власына үҙ ирке менән буйһонған, әммә уларҙың статусы - "етемдәр", йәғни "сироты". Шулай булғас, улар дәүләт яҡлауына мохтаждар иҫәбенә инә. Башҡорттар ҙа батша власын таный, уға буйһона, уға хеҙмәт итергә бурыслы - был бер ни тиклем рустарҙың "слуга" тигәненә лә тура килә. Беҙ хәҙер "слуга"ны рус байҙарының холоп һүҙе рәүешендә күҙ алдына килтерәбеҙ, ә был тәү мәғәнәһендә хеҙмәт итеүсе (служилый человек) тигәнде белдергән. Хәрби хеҙмәтте ҡара эштән өҫтөн күреү - башҡорттарҙың бик борондан килгән этник традицияһы. Хазар ҡағанаты замандарынан бирле башҡорт ир-егеттәре төрлө империялар ғәскәре составында яуҙарҙа ҡатнашҡан. Алтын Урҙа һәм Рус дәүләте - Рәсәй империяһы составында ла шулай булған. Башҡорт халҡы, оло дәүләттәргә хеҙмәт итеп, һәр бер тарихи осорҙа айырым статусҡа эйә була. Сәйәси термин ҡулланғанда, Башҡорт иле билдәле кимәлдәге автономия статусында йәшәгән.

**Ата-бабаларыбыҙ, хәрби хеҙмәт еңелдәрҙән булмаһа ла, дәүләттең уларға билдәле бер привилегиялар биреүен аңлап эш иткәндер...**

- Ҡаҙан тарихсыһы Николай Черпов бына нисек яҙа: "Рәсәй империяһында башҡа бер халыҡтың да, башҡорттарҙыҡы кеүек, шундай привилегиялары булмаған". Шуларҙың иң әһәмиәтлеһе - аҫабалыҡ хоҡуғы. Күптән түгел ошо хаҡта Татарстан һәм Силәбе тарихсылары менән дискуссия булғайны. Улар аҫабалыҡ хоҡуғын дәүләт хоҡуғы, ул башҡорттарға дәүләт тарафынан "бүләк ителгән", тигән тезис яҡлы. Быға яуап итеп, XIX быуаттың 30-сы йылдарында Рәсәйҙең дәүләт милке министры булған П.Д. Киселевтың фекерен килтереп була. Унан башҡорт ерҙәренең хужаһы кем булыуы хаҡында һорайҙар. Ул үҙенең яуабында Себерҙең төрлө рус булмаған халыҡтары, ҡырғыҙ-ҡайсаҡтар (ҡаҙаҡтар), ҡалмыҡтар йәшәгән ерҙәрҙең дәүләт милке булыуын, уларға шунда йәшәргә рөхсәт ителеүен билдәләй. Ә башҡорттар Рәсәйгә үҙҙәренең аҫаба ерҙәре менән ингән, шулай булғас, улар үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа, тип тулы юридик аныҡлыҡ индерә. Башҡорт аҫабалығы - милек булараҡ, үҙҙәре биләгән ерҙәргә хужа булыу. Был хоҡуҡ рус баярҙары һәм дворяндарының ер хоҡуғына тиң. Бында бер ни тиклем айырма ла бар: Иван Грозный заманынан башлап баярҙарҙың ергә ҡарата милек хоҡуғы сикләнә башлай, ә башҡорт аҫабалығы тейелгеһеҙ ҡала.

**Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында үҙҙәренең аҫаба ерҙәренән күсеп китеп, сит яҡтарҙа күп йылдар буйына йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, башҡорттар тыуған яҡтарында аҫабалыҡ хоҡуғын юғалтмаған. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Билдәле булыуынса, аҫабалыҡ быуындан-быуынға күсә барған. Халҡыбыҙҙа шәжәрәңде белеү - мотлаҡ талаптарҙың береһе. Бәғзе ғалимдарыбыҙ быны сағыштырмаса яҡын туғандарҙың бер-береһе менән никахлашыуын булдырмау сараһы ғына итеп ҡарай. Минеңсә, бында иҡтисади, милки мөнәсәбәттәр мөһимерәк. Шәжәрә - аҫабалыҡҡа хоҡуҡтың генеалогик нигеҙе. Миҫал өсөн: ситтә күп йылдар йәшәгән һәм унда вафат булып ҡалған башҡорттарҙың тоҡомдары әүәл ата-бабалары йәшәгән төйәккә кире ҡайтһа, улар үҙҙәренең аҫабалыҡ хоҡуғын ана шул быуындар ағаһы - шәжәрә аша раҫлай алған. Ихтилалдар ваҡытында ҡасып китеп, ҡаҙаҡ далаларында, ҡалмыҡ ерҙәрендә бик оҙаҡ йәшәгән башҡорттарҙың кире ҡайтҡан ейәндәре үҙ хоҡуҡтарын тап шулай иҫбатлаған, һәм быны рус хакимиәте чиновниктары ла таныған.

Әйтергә кәрәк, башҡорттар үҙҙәренең хоҡуҡтарын бик яҡшы белгән һәм уны үтәүҙе талап иткән. Бында беренсе урында - иҡтисади мәнфәғәттәр күҙ уңында тотола. Принцип бик ябай: беҙ батша ғали йәнәптәренә хеҙмәт итәбеҙ, үҙ бурысыбыҙҙы теүәл үтәйбеҙ, власть әһелдәренең беҙҙә сикләргә, рәнйетергә хаҡы юҡ. Ысынлап та шулай: биләгән ерҙәре, мәҫәлән, Румынияның дөйөм майҙанынан артығыраҡ булған Башҡорт иле XVII быуатта Рәсәйгә, аҡсалата иҫәпләгәндә, 5,5 мең һум тирәһе яһаҡ түләгән. Бер кешегә 20 тин тирәһе тура килә, ә һатыуҙа ат хаҡы 2-3 һум була. Яҡут өйәҙе менән сағыштырһаҡ, иҫ китерлек - улар яһаҡ өсөн түләгән ҡиммәтле йөнлек тиреләренең дөйөм хаҡы миллион һумға барып еткән. Айырма шунда - улар батша хеҙмәтенән азат була.

**Йәнә бер ҡыҙыҡлы тарихи күренеш: ҡәҙимге башҡорт хужалығының нигеҙе - малсылыҡ. Көтөүлектәр - иҡһеҙ-сикһеҙ, әммә уларға бер кем дә тейә алмай. Башҡорттарҙың етеш тормошон тәьмин итеү өсөн бик уңайлы шарттар булған...**

- П.И. Рычков яҙыуынса, ярлыраҡ тип иҫәпләнгән айырым башҡорт хужалығында 100-гә тиклем, бай башҡорттарҙа 1000 ат тотолған. Иҡтисади яҡтан 4-5 кешенән торған ғаиләгә 25 ат та етә, әммә был төрлө хәүефкә мәлдәрҙә, йотлоҡ килгәндә етерлек түгел. Йылҡы аҫрау ысулы ла үтә ябай - яҙҙан көҙгә тиклем аттар яландарҙа иркен йөрөй, ҡыштарын - тибендә. Был яҡтарға рус крәҫтиәндәрен күпләп килтерә башлағас, улар өсөн төп проблема - сәсеүлектәрен иркен йөрөгән башҡорт аттарынан һаҡлау була. Хатта Өфө ҡалаһы тирәһендәге баҫыуҙарын рус дворяндары кәртәләтергә мәжбүр булған, сөнки яҡын тирәләге башҡорт ауылдарының аттары ҡала янына уҡ килеп етә. Әйткәндәй, элек-электән яландарҙа йөрөгән башҡорт аттарын ҡыуып алып та киткәндәр. Әммә ул замандарҙа башҡорттар араһында ат ҡараҡтары булмай, аттарҙы сит төбәк кешеләре урлай.

**XVII быуатта Өфө ҡәлғәһенә яҡын йәшәгән башҡорттар менән рустар араһында ниндәй мөнәсәбәттәр өҫтөнлөк итә?**

- Был мөнәсәбәттәрҙе союздашлыҡ тип атарға мөмкин. Себер ханы Күсем, һуңынан уның улдары Рәсәйгә ҡаршы сәйәсәт алып бара, Өфөгә лә бер нисә ҡабат һөжүм итеп ҡарайҙар. Алдараҡ әйткәнемсә, ҡатай һәм һалйоттар Күсем ханды үҙҙәренең дошманы итеп күрә. Сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, рус воеводаһы тыныслыраҡ ваҡытта шул уҡ Шөгәр Күккүҙевты бер нисә тапҡыр һөйләшеүҙәр алып барыу маҡсатында Себер ханлығына ебәрә. Ул Күсем ханға, һуңынан уның улдарына рус хакимиәтенең талаптарын еткерә. Тимәк, хәҙергесә әйткәндә, башҡорттар дипломатик бәйләнештәргә лә йәлеп ителгән. Әлбиттә, Күсем хан тоҡомдары Рус хакимиәте яҡлы башҡорттарҙы үҙҙәренең дошманы итеп күрә. 1645 йылда Аблай хан ҡалмыҡтар менән бергә Шөгәр ауылын баҫып ала һәм уның кешеләрен тулыһынса юҡ итә. XVII быуат аҙаҡтарында Шөгәр Күккүҙевтың бүләләре заманында үҙҙәренең бабаһы батша хакимиәтенән жалованный грамота һәм кенәз дәрәжәһен Өфө ҡәлғәһен төҙөүҙәге ярҙамы һәм Себер ханының Арыҫлан исемле улын рустар яғына үҙ ирке менән сығырға өгөтләп күндергәне өсөн алыуы хаҡында яҙа. Хан улы Алп Арыҫлан һуңынан Рәсәй вассалы булған Ҡасимов ханлығында хан дәрәжәһендә йәшәй.

Күсем хан яҡлы башҡорттар ҙа байтаҡ була, бигерәк тә табын башҡорттары, һеңрәндәр һәм бәкәтиндәр. Улар ахырғаса, Себер ханлығы тамам тарҡалғанға тиклем, хан ғәскәренә булышлыҡ итә. Күсем ейәне Көсөк хан - башҡорт ханы, ул 1662-1664 йылғы башҡорт ихтилалы етәксеһе була. Табын ырыуы юлбашсылары Рәсәй власын 1681 йылда ғына рәсми рәүештә таный, тимәк, был көрәш бер быуат дауамында бара.

(Дауамы 10-сы биттә).

**✓ Ә минең фаразым Татарстанға алып ҡайтылған "Үтәмеш хажи яҙмаһы"ның тулы варианты күсермәһендә башҡорттар хаҡында элегерәк билдәле булмаған мәғлүмәттәр менән танышҡандан һуң тыуҙы.**



(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Башҡорттар Өфө ҡалаһын Имән-ҡала тип атай. Быны сере ниҙә?**

- Өфө тирәһендә элек-электән төҙөлөшкә ярарлыҡ оҙон, йыуан һәм төҙ имән ағастары үҫмәгән. Имән бүрәнәләрҙе ҡайҙан килтергәндәр һуң, тигән һорау тыуа. Бер генә мөмкинлек хаҡында фараз итергә була - һал менән ағыҙып килтереү. Сығанаҡтарҙа Ҡыпсаҡ олоҫо башҡорттарының Өфө ҡалаһын төҙөүҙә ҡатнашыуы хаҡында улар үҙҙәре биргән мәғлүмәт бар. Уларҙың ерҙәре Ағиҙел йылғаһының башына һәм бөйөк батша булып таныла".

Яҙмала минең иғтибарымды йәлеп иткән бер мәғлүмәт үтә ҡыҙыҡлы. XVII быуат башында Күсем хан улы Ғәли (Али) хандың йәш кенә улы вафат була. Ғәли хан үҙенең улын Өфөгә алып барып ерләргә ҡарар итә, тип белдерелә яҙмала. Был минә бик ғәжәп хәл кеүек тойолдо. Өфөлә 4 тиҫтә йыл рустар хакимлыҡ итә, уларға ҡаршы торған хан нисек итеп үҙ теләге менән ошо хәүефле урынға барып, һөйөклө улын ерләһен инде?

Ә шулай ҙа ни өсөн Өфө? Мин ошо урынды нисек итеп дырған: "Бөтөн илдең башында Баскардия батшаһы тора, ә уларҙың хөкөмдарҙары монголдарҙан. Монгол иле закондары йыйынтығы - "Яса". Әлбиттә, уны теүәл үтәүҙе уҡымышлы монгол хөкөмдарҙары тикшерә алған. Башҡорттарҙың монгол осоронда мосолман булыуын иҫәпкә алһаҡ, уларҙың монгол судьялары несториан йүнәлешендәге христиан булыуы ла ғәжәпкә ҡалдыра. Быны аңлатыуы артыҡ ҡыйын түгел. Башҡорт йәмғиәтендә бер ҡасан да вертикаль власть булмай, быуаттар дауамында горизонталь-демократик мөнәсәбәттәр өҫхеҙмәткә бик теләп ҡабул итә. Күрәһең, мосолман шибаниҙар мосолман башҡорттарҙы үҙ халҡы итеп ҡабул иткән. Ошондай шарттарҙа ғына Турахан кәшәнәһенең, изгеләр зыяраттарының Башҡорт иләндә барлыҡҡа килеүе мөмкин була.

**Былтыр ноябрь айында Өфөлә "Мәжитов уҡыуҙары" сиктәрендә III Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция уҙғарылғайны. Ул күренекле тарихсы-археолог, академик Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналды. Билдәле булар ҡалдыҡтары булыуы асыҡланды. Тимәк, ҡаланың фортификация, йәғни дошман һөжүменән һаҡланыу ҡоролмалары ла булған. Заманында ул Көньяҡ Уралда сәскә атҡан бай ҡалаларҙың береһе булған, тип фараз итергә була.**

Шәхсән Көньяҡ Уралда ошондай һөнәрселек һәм сауҙа үҙәгенең барлыҡҡа килеүен көнбайыш төркиҙәренең бик ҡеүәтле дәүләте - Хазар ҡағанаты дәүере менән бәйләп аңлатам. Хазарҙарҙа сауҙа бик үҫешкән була - уларҙың рахдониттары, йәғни сауҙагәрҙәре, Ҡытайҙан Европаға тиклем

# ӨФӨ СЕРҘӘРЕН АСА,

## йәки Үткән замандан - киләсәккә

яҡын, ул яҡтарҙа төҙөлөш эштәренә ярарлыҡ ағастар, шул иҫәптән имән дә үҫә. Йылғаға яҡын урмандарҙа әҙерләнгән ағастарҙан һалдар эшләп, Өфөгә тиклем ағыҙып килтереп була.

Әңгәмәбеҙҙе Өфө ҡалаһының атамаһынан башлап ебәргәйнек, һеҙ уны сетерекле, серле мәсьәлә тип әйттегеҙ. Һәр бер серҙең асылышы, сиселеше була. Һуңғы ваҡытта шул хаҡта үҙ версиям да хасил булды. Быны Петр Рычков та заманында үҙ фаразын яҙып ҡалдырған. Уныңса, Нуғай ханының ставкаһы Өфө йылғаһы буйында, "Чертово городище" тигән атама менән билдәле булған ерҙә урынлашҡан. Бәлки, Нуғай ханы ставкаһы ла Өфө йылғаһы исемен йөрөткәндер, тип фаразлай ул. Археологтар был ҡомарҡыны күптән ҡаҙып тикшереп бөткән, һәм уның мәҙәни ҡатламы шул тиклем ярлы булып сыға - күҙгә бәрелерлек артефакттар юҡ тиерлек. Хан тиклем хан ставкаһының мәҙәни ҡатламы күпкә байыраҡ булырға тейеш бит. Шуға Рычков версияһын ҡабул итеп булмай.

Ә минең фаразым Татарстанға алып ҡайтылған "Үтәмеш хажи яҙмаһы"ның тулы варианты күсермәһендә башҡорттар хаҡында элегерәк билдәле булмаған мәғлүмәттәр менән танышҡандан һуң тыуҙы. Билдәле булыуынса, ошо яҙманың тулы варианты Ризаитдин Фәхретдиндә һаҡлана, ул яҙманы Әхмәтзәки Вәлидигә бирә. Ә.-З. Вәлиди уны үҙе менән Төркиәгә алып китә, яҙма уның шәхси архивында һаҡлана. Унда XVII быуатта Башҡорт иләндә булып үткән ваҡиғалар хаҡында бәйән ителә. Атап әйткәндә, яҙмала Себер хандары хаҡында байтаҡ мәғлүмәттәр тупланған. Мәҫәлән, "Үтәмеш хажи яҙмаһы"на ярашлы, Себер ханлығына нигеҙ һалыусы Хажи-Мөхәммәт хан (1421-1428 йй ханлыҡ итә), Тора тип аталған Себер ханлығынан башҡа, "Башҡорт, Алатыр, Муҡшы өлкәләрен контролдә тота һәм маңғыттарҙың Шәһри Тура атамаһы менән дан алған Шәһри Болғарын баҫып ала



*Был тарихи ҡаланы асыу - академик Н.А. Мәжитовтың ҙур ғилми ҡаҙанышы. Иртә урта быуаттарҙа хәҙерге Өфө ҡалаһының үҙәк өлөшөндә ҙур ҡәлғә һәм балсыҡ иҙмәһенән һалынған торлаҡтар, оҫтаханалар, башҡа йорттар булған. Был ҡалала һөнәрселек, металл иретеү, ювелир эштәре кеүек хужалыҡ йүнәлештәре булыуын раҫлаусы артефакттар табылды. Өфө-II ҡаласығында ер валдары, тәрән йырындар, балсыҡ стеналар ҡалдыҡтары булыуы асыҡланды. Тимәк, ҡаланың фортификация, йәғни дошман һөжүменән һаҡланыу ҡоролмалары ла булған. Заманында ул Көньяҡ Уралда сәскә атҡан бай ҡалаларҙың береһе булған, тип фараз итергә була.*

анлатыу тураһында тәржемәсенән һораным. Ул бында һүҙ Өфө ҡалаһы тураһында түгел, шулай тип аталған ер тураһында барырға тейеш, тине. Күрәһең, заманында Өфө атамаһы билдәле бер ергә ҡарата ҡулланылғандыр. Шул уҡ ваҡытта хәҙерге Шишмә районында Турахан кәшәнәһе булыуын беләбеҙ. Башҡорттар Себер яғын Тура (Тора) иле, тип атап, хандарын Турахан тип нарыҡлаған. Тимәк, Турахан кәшәнәһе тирәһендә хан статусындағы заттар һәм уларҙың яҡындары ерләнеүе мөмкин.

Быға нимә сәбәп булыуы мөмкин? Джучи улусы, йәғни Алтын Урҙа тарҡала башлағас, башҡорттар хәүефләнә башлай. Улар - империя хеҙмәтселәре, әммә үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булып йәшәй. Империя бөтөн дәүләтте тәртиптә тота ала. Ә ул тәртиптән юҡҡа сығыуы мөмкин. Монголдар осоронда нисек итеп тәртип булдырылған? Ошо хаҡта башҡорттар араһында булып ҡайтҡан Венгрия монахы Иоганка быны нисек яҙып ҡалтөнлөк итә. Ырыу-ҡәбилә иерархияһы ла булмай - барыһы ла тигеҙ хоҡуҡлы. Бындай йәмғиәттә ситтән килтерелгән арбитр булыуы мотлаҡ. Хәҙерге термин менән ул третей судьяһы, тип атала. Ә ғәҙел хөкөм сығара алыусы кәрәк - йәмғиәт булғас, низағһыҙ булмай, аҙмы-күпме енәйәттәр ҙә ҡылына. Бындай үҙаллы йәмғиәттәге тәртипте һаҡлау, хөкөм сығарыу өсөн судьяларҙы империя ҡуя. Улар булмаһа, төрлө ырыуҙарҙан хасил булған йәмғиәт берлеге быуаттар дауамында тотороҡло тормаҫ ине.

Алтын Урҙа тарҡалғас, Сынғыҙ хан тоҡомдарынан Бохарала һәм Себерҙә хакимлыҡ иткән шибанизар ғына ҡала. Башҡорттар уларҙы ғына үҙҙәренең ханы итеп таный, сөнки нуғайҙар бөйөк монгол закондарын - "Яса"ны һанға һуҡмай (ә был закон буйынса башҡорт ерҙәре тейелгеһеҙ), башҡорт ерҙәрен баҫып ала, талай, ҡоллоҡҡа алып китә. Үҙ сиратында, шибани хандар башҡорттарға ышаныс белдерә, уларҙы үҙ ғәскәрҙәренә

**лыуынса, баш ҡалабыҙҙың иң боронғо ҡомарҡыларының береһе - Өфө-II ҡаласығы. Н.А. Мәжитов уны ентекләп өйрәнеүгә күп көс һалды, һөҙөмтәлә ул хәҙерге Өфө ҡалаһы территорияһында урта быуаттарҙа, атап әйткәндә, V-VI быуаттарҙан алып XVI быуатҡа тиклем, ҙур ҡала булыуын иҫбат итте. Академик уны Башҡорт ҡалаһы, тип атаны. Хәҙер Өфө ҡалаһына тиклем дә ошо урында боронғо ҡала булыуы хаҡында бөтөн донъя археологтары ла белә тиһәк, һис артыҡ булмаҫ...**

- Эйе, был тарихи ҡаланы асыу - академик Н.А. Мәжитовтың ҙур ғилми ҡаҙанышы. Иртә урта быуаттарҙа хәҙерге Өфө ҡалаһының үҙәк өлөшөндә ҙур ҡәлғә һәм балсыҡ иҙмәһенән һалынған торлаҡтар, оҫтаханалар, башҡа йорттар булған. Был ҡалала һөнәрселек, металл иретеү, ювелир эштәре кеүек хужалыҡ йүнәлештәре булыуын раҫлаусы артефакттар табылды. Өфө-II ҡаласығында ер валдары, тәрән йырындар, балсыҡ стена-

ебәк туҡымалар, ҡиммәтле тире йәнлектәре һәм башҡа үтемле тауарҙар менән һатыу итә. Хазарҙар - яугир халыҡ, әммә уларҙың төп байлыҡ сығанағы сауҙа менән бәйле. Н.А. Мәжитов Башҡорт ҡалаһы тип атаған (ул урта быуаттар картографтары Пицигани-ҙар һәм Меркатор карталарында Paskerti тип теркәлгән) һөнәрселек һәм сауҙа үҙәге хазарҙар өсөн дә бик уңайлы булған, сөнки бынан һыу юлы буйлап төньяҡҡа ла, көньяҡҡа ла барып була. Ә Көньяҡ Уралда һунарсылыҡ - иң боронғо шөғөлдәрҙең береһе, башҡорттар - оҫта һунарсылар. Тимәк, бында сауҙагәрҙәргә ҡиммәтле йәнлек, шул уҡ һыуһар тиреләрен күпләп һатып алыу мөмкинлеге булған.

Бына Өфө археологияһын миҫалға алайыҡ. Яңыраҡ университеттың төп бинаһына ҡаршы сит ил студенттары өсөн ятаҡ һалыу ҡаралғас, беҙҙең археологтар ҡаҙыныу эштәрен башҡарҙы. Күп ҡатлы ҡәберҙәр булыуы асыҡланды: өҫтәгеһе - яҡынса VIII, урталағыһы - VI, иң аҫтағыһы IV быуатҡа ҡарай. Инвентары бай: бында, башлыса, һыбайлылар ерләнгән, сөнки теҙген, ауыҙлыҡ, өҙәңге кеүек ат менән бәйле артефакттар күп. Башҡа әйберҙәр ҙә бында ситтән килгән кешеләр ерләнеүенә дәлил. Мин бынан ҡыҙыҡлы ғына һығымта яһаным: башҡорттар сит кешеләр, күскенселәр зыяраттары булған ерҙе өнәп бөтмәй, шуға рустарға ла ҡәлғә һалыр өсөн тап ошо Өфө ярымутрауындағы ерҙе бирергә риза булғандарҙыр, тим. Ә боронғо Башҡорт ҡалаһы менән XVI быуат аҙағында төҙөлгән Өфө ҡәлғәһе араһында күсәгилешлек юҡ: түгеһе Өфө ҡәлғәһенән һаман башлағансы күп йылдар элек ниндәйҙер беҙгә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында туҙҙырылған, емертелгән һәм юҡҡа сыҡҡан. Әммә тарих дауам итә, беҙгә үткән заман тарихын киләсәгебеҙҙе аныҡыраҡ күҙаллар өсөн өйрәнеү һәм белеү фарыз.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Яҙмыштарыбыҙ ҡушҡанса, Өфөбөҙҙән айырыла алманыҡ: быйыл ҡала кешеһе булғанлыбыҙға 44 йыл булып китте. Ошо арауыҡта күп ҡалаларҙа булырға тура килде, әммә барыбер үҙебеҙҙең Өфөбөҙ күркәмерәк тойола.***




"Өфө һөйләй. Өфө ваҡыты менән иртәнге сәғәт ете..." Өйөбөҙҙөң түр яғында, комод өҫтөндә бик матур итеп эшләнгән серле ҡумта эсенән миңә һис таныш булмаған апай йә иһә ағай яғымлы тауыш менән тап беҙгә өндәшкән кеүек. Миңә 5 йәш кенә, шулай ҙа был ҡумтаның радио тип аталғанын беләм. Уҡырға өйрәнгәс, шул радионың "Родина-47" тип аталғанын да белдем. Өйөбөҙҙәге иң затлы әйбер ҙә шул булғандыр. Уның түңәрәк борғостарын тегеләй-былай әйләндереп, ҡабыҙып-һүндереп тә, көйләп тә була. Рус, татар, башҡа ниндәйҙер ят телдәрҙә лә һөйләй ала ине шул ғәжәп ҡумта. Өфө тигән һүҙ минең аңыма ана шул радио аша килеп инде лә, һоҡланғыс бер мөғжизә кеүек, үҙаллы йәшәй башланы...

Өфө концерт бирә: "Грузинский сәй сәйнүктә, өҫтәлдә башҡорт балы", йә иһә "Их, Өфө ҡалаһы, йәмле Иҙел буйында, ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, һин булырһың уйымда" һәм башҡа матурҙарҙан матурыраҡ йырҙар, баян моңдары, Елизавета Крылованың фортепьянола уйнауы...

Өфө спектакль тапшыра: "Ҡара йөҙҙәр" - исеме ниндәй зәһәр бит әле, артистар ҙа шундай шомло үә хәсрәт-һағышлы тауыш менән уйнай, әммә бергәләшеп тыңлағас, ҡурҡмайбыҙ.

Кис етеүгә инәйемә инәләм: радионы ҡабыҙ әле, балалар өсөн тапшырыу башлана! Атайым беҙгә радиоға ҡағылырға ҡушмай, ватып ҡуймаһындар, тип уйлағандыр. Ә тапшырыу шундай күңелле, "Шат йондоҙҙар" тип атала. Өфө радиоһы беҙҙе өр-яңы, беҙ белмәгән-күрмәгән донъяға алып сыға - шул үҙе генә лә мөғжизә түгелме ни!

Өфө ҡалаһы күңелемә ана шундай мөғжизәле бер күренеш булып ингәс, унда йәшәгән кешеләрҙән дә бәхетлерәктәр юҡтыр, тип уйлай инем.

1960 йылда күрше ауылда 6-сы класта уҡыған ағайыбыҙ фажиғәле рәүештә үлеп ҡалғас, атайыбыҙ ана шул Өфөгә ҡаттан-ҡат барып йөрөп, ауылыбыҙға мәктәп юллау маҡсатында ул саҡтағы мәғариф министры Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина менән биш-алты тапҡыр осрашҡан, Юғары Совет депутаты, халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаштың өйөндә булған. Мәктәп бинаһы бер йәй эсендә һалынып та бөттө.

Шуныһы ҡыҙыҡ, мин Мәсәғүт педучилищеһының 4-се курсында уҡыған сағымда Мәскәүгә экскурсияға барҙым, ә Өфөлә һис бер булғаным юҡ. Ҡулыбыҙға диплом алғас, училище мине һәм Дыуан районында тыуып үҫкән Александра Сухневаны Мәскәү дәүләт пединститутына уҡырға ебәрергә булды. Министрлыҡтан юллама алыр өсөн Өфө ҡалаһына килдек. 1972 йылдың июль айы, көндәр аяҙ, ҡояшлы, Өфө ялт итеп тора. Ҡайҙа ҡарама, йәшеллек, сәскә газондары ла ҡалаға йәм өҫтәй. Баш ҡалабыҙ беҙҙе - ҡап-ҡара сәсле, бәләкәй буйлы башҡорт егетен һәм һонтор рус ҡыҙы Сашаны бик ихлас ҡабул иткәндәй тойолдо. Өфөлә тәү тапҡырбыҙ, ҡайҙа, нисек барырға белмәйбеҙ. Киоскынан Өфөнөң туристик картаһын һатып алдым, уны әлегә тиклем бер ҡиммәтле ҡомартҡылай күреп һаҡлайым. Хаҡы 29 тин, тиражы иҫ китмәле - 300 000 дана! Шулай күп булһа ла, һатылып бөткән ул.

Беҙҙең юлламаға имза ҡуя торған министр урынбаҫары дүшәмбе генә була тигәс, аптырабыраҡ ҡалдыҡ. Ул саҡта "Башҡортостан пионеры" гәзитендә эшләгән яҡташыбыҙ, шағир Тимер ағай Йосоповты күреп китәйек тип, редакцияға йүнәлдек. Тимер Йосоп улы беҙҙең сығарылыш тантанаһында ҡатнашҡайны. Ул, бик алсаҡ кеше, беҙҙе үҙенең фатирына алып ҡайтты, Дамира еңгәбеҙ билмән менән һыйланы.

Мәскәүҙә уҡыған 5 йыл дауамында баш ҡалабыҙға килеп-китеп йөрөлдө, әммә Өфө ул саҡта минең күңелем түренә үтеп инмәгәйне әле. Өйләнешкәс,1980 йылдың август айында ҡатыным менән Өфөлә Нижегородка бистәһендә фатирҙа торған ҡайнағаға ҡунаҡҡа килдек. Хәләл ефетем менән кинотеатрҙарға һинд фильмдарын ҡарарға йөрөйбөҙ, аяҡтарыбыҙ талып бөткәнсе урамдарҙы ҡыҙырабыҙ. Август айында Өфө һоҡланып туймаҫлыҡ бер гүзәл урынға әйләнә: аллы-гөллө сәскәләр күҙҙең яуын алып тора, ҡайҙа ҡарама - ҡып-ҡыҙыл миләш тәлгәштәре, тегеләй-былай үтеп йөрөүсе кешеләр ҙә ҡәҙимгенән матурыраҡ булып күренә. Урам тулы йәштәр - институттарҙа ҡабул итеү имтихандары бара. "Ҡара әле бынау ҡыҙҙарға, ҡалай сибәрҙәр!" - тим ҡатыныма. "Улай булғас, ниңә мине алдың?" - тип көлә хәләлем. Шул саҡ бик моңло тауышлы Йәсәүи ҡайнағамдың беҙҙең туйыбыҙҙа ҡаттан-ҡат башҡарған йыры иҫкә төшә:

*"Өфө ҡалаһы ни өсөн матур?*
*Беләм, дуҫҡайым, беләм серҙәрен:*
*Мин һинең менән йөрөйөм урамда,*
*Миңә йылмая һинең күҙҙәрең.*
*Ҡараһаң миңә,*
*Йылмайһаң миңә,*
*Һин дә бик матур,*
*Өфө лә матур,*
*Бик матур донъя!"*

1980 йылда, Башҡорт дәүләт педагогия институтының психология кафедраһына эшкә килгәс, Өфө кешеһе булып киттем. Пропискам юҡ, паспортымды төп корпусҡа теркәнеләр. Тәүге йылда яр буйындағы Архирейка тип аталған бистәләге бик боронғо, ике ҡатлы ағас йортҡа фатирға индек. Яҙын тирә-яҡ йәшеллеккә күмелә, тәҙрәнән Ағиҙел аръяғы күренеп тора, хатта өй янындағы ҡыуаҡлыҡта һандуғастар һайрай - шундай күңелле! Иртәләрен теплоход ҡысҡырған тауышҡа уянып китәһең, тиҙ генә тора һалып, колонкаға һыуға йүгерәһең. Шулай итеп, бер йыл эсендә Өфөгә шул тиклем ерегелде, ул тыуған ҡалама әйләнде. Артабан 13 йыл Аксаков урамындағы ятаҡта йәшәлде, бер-бер артлы тыуған малайҙарыбыҙ менән, көн һайын тигәндәй, Өфөнөң үҙәк урамдарында икешәр сәғәт йөрөп ҡайтабыҙ. Ғафури урамында йәшәгән Әхмәт ағай Сөләймәнов йыш осрай. Ул, йылмая бирерәк, беҙгә өндәшә: "Вәлиәхмәт тағы ла бәпкәләрен көтөргә алып сыҡҡан", - ти. Ҡатыным менән беҙ ҙә көлөшкән булабыҙ. "Өфө ҡалай матур!" - тип, һоҡланып туймаҫлыҡ шулай.

Өфө - дуҫлыҡ ҡалаһы. Халыҡтар Дуҫлығы монументы булған өсөн генә түгел. Бында аралашыу даирәһе шул тиклем киң - тик бер йыл дауамында ғына әллә күпме кеше менән осрашаһың, фекер алышаһың, ә уларҙың бәғзеләре һинең яҡын дуҫыңа әйләнә. Араларында өлкәндәре лә, йәшерәктәре лә булды. Кем генә булманы дуҫтар араһында: философтар, тарихсылар, филологтар, яҙыусылар һәм шағирҙар, журналистар, уҡытыусылар һәм табиптар...

Беҙ йәш саҡта "Белем" йәмғиәте институт уҡытыусыларын төрлө предприятиеларға, ойошмаларға, мәктәптәргә, мәҙәниәт һарайҙарына лекция уҡырға саҡыра ине. Кафедра мөдире Вадим ағай Сафин, башлыса, лекция уҡырға мине ебәрер булды. Эштән һуң арыҡҡан булһа ла, һис ҡарышманым, психология буйынса әллә күпме популяр сығыштарым күптәрҙең иҫендә ҡалғандыр, тим. Әле булһа ла ошо ағайға рәхмәтлемен: тап Өфө мине сыняһау лектор итте.

Ваҡыты еткәс, йәмәғәтселек эшмәкәрлегенә йәлеп ителдем. Ошо өлкәлә иң ҙур уңышым - данлы 112-се Башҡорт атлы дивизияһының яу юлдары буйлап автосәйәхәт ойошторҙом, Өфөнән Берлинғаса йөрөп ҡайтылды, тиҫтәләгән туғандар ҡәберлектәренә сәскәләр һалынды, Башҡортостан тупраҡы һибелде... Баш ҡалабыҙҙың Һупайлы бистәһе халҡы бөн фәҡирегеҙҙе депутат итеп күтәрҙе, был эштә лә һынатманым, халыҡ мәнфәғәте өсөн, еребеҙ, телебеҙ хаҡына егелеп эшләнем. Ә бына журналист булып китермен тигән уйҙың башыма инеп сыҡҡаны ла булманы, ә "Киске Өфө" гәзитендә эшләү мине ысын халыҡ мәғрифәтселеге юлына алып сыҡты.

Яҙмыштарыбыҙ ҡушҡанса, Өфөбөҙҙән айырыла алманыҡ: быйыл ҡала кешеһе булғанлыбыҙға 44 йыл булып китте. Ошо арауыҡта күп ҡалаларҙа булырға тура килде, әммә Рәсәйҙә, донъя илдәрендә ниндәй генә төҙөк үә бар яҡтан комфортлы ҡалалар булмаһын, барыбер үҙебеҙҙең Өфөбөҙ күркәмерәк тойола. Баш ҡалабыҙ күптән йөрәктәребеҙҙе биләгән, ул беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың йәме бит!

Ағиҙелдең бейек һәм текә ярына, Салауат һәйкәле янына килгән сағымда күңелемдә әлеге йыр сыңлап торғандай:

*"Тауҙан тауҙарға ҡояш күсенә,*
*Һиңә лә миңә балҡый шикелле.*
*Салауат батыр ҡорос атында*
*Һине лә мине һаҡлай шикелле.*
*Ниндәй ҡалалар ерҙә күрмәнем,*
*Булманы минең ҡайҙа йөрөгәнем.*
*Өфө тиһәләр, һине һағынам,*
*Өфө тиһәләр, яна йөрәгем".*

Эйе, ихлас әйтәмен: Өфө ҡалаһын үҙһенмәгән, уны яратмаған, сит-ят ерҙәрҙә йөрөгәнендә уны һағынмаған кеше таш бәғерлелер ул. Ә беҙ, ауыҙ тултырып, бар донъяға яңғыратып, ҡысҡырып әйтергә хаҡлыбыҙ: "Гүзәлдәрҙән-гүзәл Өфөбөҙ! Һин - Башҡорт иленең йөҙөк ҡашы! Беҙ һине яратабыҙ!"

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*БЕР ХӘРЕФ ХИКМӘТЕ*

# ҠЫУАНДЫҠТЫҢ ҠЫУАНҒАНЫ



Ҡыпсаҡтағы Ҡыуандыҡҡа Ҡәҙриә, Ҡыям ҡунаҡҡа ҡайтты. Ҡыуандыҡ ҡарындашының ҡайтҡанына ҡыуанды, ҡосаҡлап ҡыланды. Ҡыуандыҡтың Ҡафияһы ҡыш ҡарҙа ҡаҙан ҡайнатҡан, Ҡарайғырҙы ҡороҡлаған ҡыйыу ҡатын. Ҡырпаҡ ҡарғаса ҡырҡлаған ҡаҙ ҡарай. Ҡафия ҡоймағын да ҡойған, ҡарағатын да ҡайнатҡан, ҡунаҡтарына ҡаҙы, ҡабартма ҡуйҙы, ҡымыҙ ҡойҙо, ҡаты ҡоротон да ҡыҙғанманы. Ҡыҫтапмы-ҡыҫтаны Ҡафия ҡунаҡтарын. Ҡыҙ-ҡырҡын Ҡафияның ҡораған ҡорамаһына ҡыҙыҡты.

Ҡунаҡтың ҡыҙыуында Ҡәҙриә Ҡыямын Ҡәйүм ҡоҙаһынан ҡыҙғанып ҡыйналды:

Ҡарамалыла ҡарама,
Ҡарамаға ҡарама.
Ҡара ҡашың ҡыймылдатып,
Ҡарпышыма ҡарама.

Ҡыям ҡыҙарҙы, ҡоҙаларынан ҡыйынһынып ҡыйпысыҡланды. Ҡараңғылағас, Ҡыям Ҡайраҡлыһына ҡасып ҡайтырға ҡарһаланды. Ҡасһа ла ҡоро ҡасмаған, ҡәһәрең, ҡайнағаһы Ҡасимдың ҡамытын ҡулына, Ҡафияның ҡырҡ ҡаҙының ҡап-ҡараһын ҡултығына ҡыҫтырған, ҡабаланып, ҡайынеңгәһенең ҡатаһын ҡуңалтаҡ ҡатҡан. Ҡамыт Ҡәйүм ҡыйыш ҡатанан ҡурҡып, ҡолап, ҡолағын ҡанатҡан, ҡатыуын ҡалҡытҡан. Ҡасҡан Ҡыямды Ҡәҙриә, Ҡафия Ҡарамалынан, ҡәйнештәре Ҡартсабындан Ҡараталға ҡарай ҡаманылар.

Ҡасим "ҡамыт, ҡамытым...", ҡәйнештәре "ҡыу, ҡыу..", Ҡәҙриә "ҡал, ҡал...", Ҡафия "ҡаҙ, ҡаҙ..", Ҡыуандыҡ "ҡуй, ҡуй...", ҡысҡырҙылар. Ҡыҙыу ҡыпсаҡтар ҡарағайлыҡты, ҡайынлыҡты ҡалдырмай ҡараны. Ҡыҙ-ҡырҡынды ҡурҡытып, ҡуян ҡамышлыҡтан ҡасҡас, ҡараһалар, Ҡыям ҡайғырып ҡына ҡаты ҡоротҡа ҡымыҙлыҡ, ҡаҡы ҡушып ҡапҡылай. Ҡафия ҡаҙының ҡуҙҙа ҡыҙҙырылмағанына ҡыуанды. Ҡыям ҡупырыҡ ҡәйнештәренә ҡаршылашты, ҡайрылып ҡаҡшаны. Ҡыҙыулыҡтан ҡылған ҡылығынан ҡыйынһанһа ла, Ҡыям Ҡараталда ҡалманы. Ҡайтҡанда ҡара ҡаҙ ҡаңғылдап ҡаҡшатты.

Ҡыуандыҡ Ҡыямдың ҡайтҡанына ҡыуанды. Ҡыуандыҡтың ҡыуанғанына ҡалғандар ҙа ҡыуанышты.

Ҡарағанат ҡарғалар
Ҡарҡылдаша ҡуймай.
Ҡыуандыҡ та, Ҡыям да
Ҡәҙриәнән ҡурҡмай.

- Ҡуй, ҡаранмағыҙ, ҡорғанды ҡороғоҙ. Ҡәҙерләгәндәрендә ҡәҙерләнеп ҡалайыҡ...

**Ҡыпсаҡтарҙың ҡыйналғанын ҡарап ҡаҡшаусы**
**Ҡыҙыҡбикә Ҡыуанғанова исеменән:**
**Айһылыу БАЙБАҠТИНА.**
**Йылайыр районы.**

***✓ Бер бәләкәй генә алмала С витаминының күләме 1500 миллиграмм тирәһе. Шулай уҡ был емештең аллергияға, ялҡынһыныуға, яман шешкә, вирустарға ҡаршы сифаттары асыҡланған.***



ИНТЕРНЕТТАН



# ИШЕК УЙЫМЫ...

## хәтергә тәьҫир итә

■ Корнелла университеты ғалимдары билдәләүенсә, иммунитетты һәм сәләмәтлекте нығытыу өсөн көн һайын витаминдар ҡулланғансы, алма ашау ҙа етә. С витаминынан тыш, алма флавоноидтар һәм полифенолдар антиоксиданттары бар. Бер бәләкәй генә алмала С витаминының күләме 1500 миллиграмм тирәһе. Шулай уҡ был емештең аллергияға, ялҡынһыныуға, яман шешкә, вирустарға ҡаршы сифаттары асыҡланған.

■ Ябай тоҙға ҡарағанда, таш һәм диңгеҙ тоҙо файҙалыраҡ һанала. Әммә Salt and Health компанияһы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, тоҙҙоң был төрҙәренең химик составында айырма бөтөнләй юҡ. Вольфсон превентив медицина институты табиптары фекеренсә, кулинарҙарҙың таш йәки диңгеҙ тоҙонда мөһим минераль матдәләр күберәк тигәне дөрөҫлөккә тап килмәй. Табиптар шулай уҡ бөгөн кешеләрҙең тоҙҙо кәрәгенән артыҡ ҡулланыуы тураһында ла белдерә. Тоҙҙоң көндәлек нормаһы - 1 балғалаҡ, әгәр ул ошо билдәнән ашып китһә, ҡан баҫымы күтәрелеү, инсульт ҡурҡынысы янай.

■ Ҡайһы саҡта ҡайҙалыр инеп, унда нинә ингәнегеҙҙе онотҡанығыҙ бармы? Нотр-Дам университеты тикшеренеүселәре лә ошо билдәле феноменды тикшереп ҡарарға булған. Уларҙың фекеренсә, ишек уйымы аша үтеү ҡыҫҡа ваҡытлы хәтерҙе насарайта. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттар виртуаль һәм реаль шарттарҙа бер нисә эксперимент үткән. Беренсе һынау ваҡытында улар виртуаль ысынбарлыҡта предметтарҙы ҡаптарға төргән һәм ҡапты йә бүлмәнең икенсе урынына күсереп ултыртҡан, йәки икенсе бүлмәгә алып сыҡҡан. Бынан һуң тәжрибәне реаль шарттарҙа эшләп ҡарағандар. Өсөнсө һынауҙа ҡапҡа төрөлгән объект бер нисә бүлмә аша үтеп, кире тәүге бүлмәгә әйләнеп ҡайтҡан. Асыҡланыуынса, экспериментта ҡатнашыусыларға икенсе бүлмәгә сығырға тура килһә, уларға ҡап эсендә нимә ятыуын хәтерләүе ауырға тура килгән. Өсөнсө һынау күрһәтеүенсә, хәтергә шарттар түгел, ә ишек уйымы аша үтеү нығыраҡ тәьҫир итә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Гэбриэль Радвански иҫәпләүенсә, ишектән инеүҙе йәки сығыуҙы мейе эшмәкәрлек эпизодтарының тамамланыуы тип ҡабул итә һәм "архивҡа тапшырып" өлгөрә.

■ Күптәр йүткергәндә һәм һыуыҡ тейгәндә антибиотиктар ярҙам итә тип уйлап, ныҡ яңылыша. Ысынбарлыҡта, антибиотиктар тын юлдары инфекцияларын тыуҙырыусы вирустарҙы дауаламай. Бынан тыш, күптәрҙең өйөндә ҡасандыр табип тәғәйенләгән антибиотиктар һаҡланыуы һәм был дарыуҙар менән улар аҙаҡтан үҙ аллы дауаланыуы ла асыҡланған. Антибиотиктарҙы дөрөҫ ҡулланмауҙан дауалап булмай торған инфекцияларҙың барлыҡҡа килеүе бар, тип иҫкәртә иммунологтар һәм инфекционистар.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, аҡыл йәһәтенән тиҙерәк үҫешкән балаларға үҫкәс тыйылған матдәләрҙе татып ҡарау хәүефе лә янай. Белгестәр фекеренсә, аҡыллыраҡ кешеләрҙе бар әйберҙәр ҙә тиҙерәк ялҡыта, шуға ла уларҙа яңы тойғолар кисереп ҡарау теләге көслөрәк була. Шулай уҡ интеллект кимәле юғарыраҡ булған һайын, кеше эргә-тирәһендәге кешеләрҙең тәҡдимен кире ҡаға алмай, былар барыһы ла наркотиктар ҡуллана башлауға килтереүе ихтимал.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Ошондай исем менән үткән сараны, быйылғы Ғаилә йылына арнап, Балбыҡ ауылы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы район ағинәйҙәренә тәҡдим итте. Борондан өләсәйҙәребеҙ ғаилә тотҡаһы, тәрбиә мәктәбе бурысын йөкмәгән. Уларҙың тәрбиә мәктәбе бөгөн халыҡ педагогикаһы тип йөрөтөлә. Халыҡ педагогикаһы иһә халыҡ ижадына нигеҙләнә. Өләсәйҙәребеҙҙең күңел һандығындағы һаҡланған ошо ҡомартҡылар менән танышыуҙы, бүҫкәреберәк киткән өлөшөн тулыландырыуҙы маҡсат итеп ойошторолдо ла инде был сара.**

# ӨЛӘСӘЙҘЕҢ КҮҢЕЛ ҺАНДЫҒЫ



Саҡырыуҙы Һөләймән, Ҡужай, Әүеш (Иҫке Байрамғол), Һөйөндөк, Рысай, Мулдаҡай ауылдарындағы ойошмалар шатланып ҡабул итте. Сараның тағы бер шарты буйынса, һәр команда ағзалары ейәнсәрҙәрен дә алып килергә тейеш ине. Шулай булмаһа, сараның ни файҙаһы! Балаларҙың әҙерлек барышында уҡ өләсәйҙәре менән бергә булғанлыҡтары ярыш барғанда күҙгә ташланды. Алдан уҡып, йөкмәткеһен белеп килергә тейешле әкиәттәр буйынса бирелгән тест һорауҙарын тултырыуҙа ла, серле йомаҡтарҙың яуабын табыуҙа ла ошо ейәнсәрҙәр уңғанлыҡ күрһәтте лә инде.

Халҡыбыҙҙың боронғолоғон билдәләгән, борондан ошо ерҙә -Уралда йәшәүҙәренә танытма булған аҫыл ҡомартҡыбыҙ булған "Урал батыр" эпосына айырым ҙур урын бирелде. Һәр команда эпостың йөкмәткеһен яҡшы өйрәнеп килергә тейеш ине, шулай булды ла. Һәр кем үҙ өлөшөнә төшкән урындың йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәре менән матур, тулы итеп һөйләп ишеттерҙе. Эпостың йөкмәткеһен башынан аҙағына тиклем барлағандан һуң, ни өсөн Йәнбикә менән Йәнбирҙенең йәшәү рәүеше шулай булған, ни өсөн Шүлгән яңылыш юлдан киткән, ни өсөн кесе һәм оло маҡсатлы Урал халыҡ батырына әйләнгән тигән һорауҙарға асыҡлыҡ индереү, Уралдың кешелеккә ҡалдырған васыятының бөгөнгө көндәге әһәмиәте, унан тыуған уландарҙың ата юлын тотоуы тураһында фекер алышыу шул тиклем йәнле барҙы. "Эпосты ҡайтанан уҡып сығам. Аңлашылмаған урындарын аңлап ҡалдым", - тигән ихлас һүҙҙәрҙе ишетеү йөрәккә май булып яғылды.

Бәйгенең "Халыҡ йырҙарында - халҡым тарихы" тигән өлөшө лә уйландырҙы ла, моңландырҙы ла. Ҡаһым түрә, Урал, Тәфтиләү, Ҡуңыр буға, Илсе Ғайса, Ахун йырҙарының бәғерҙәрҙе өҙөрлөк тарихтарын һөйләп ишеттергәндән һуң, өләсәйҙәребеҙҙең моңло тауыштары менән йырҙы йырлап ебәреүҙәренән күҙҙәргә йәш эркелде. Тарихын тыңлағандан һуң йыр бар булмышы менән күңелдәрҙе арбай икән ул. Бер шағирәнең: " Халҡым моңдо - һандуғастан түгел, һандуғас халҡымдан отҡан", - тип әйткәне лә хаҡ икән, тип ултырабыҙ йырсыларҙы тыңлағанда. Илсе Ғайса йырының бер вариантын Әүеш - Балбыҡ яҡтарында Ахун тип йөрөтөүҙәрен дә белеп ҡалдыҡ.

Ғаилә темаһына арналған мәҡәлдәрҙең яртыһын табып та аҡыл тупланы өләсәйҙәребеҙ. Сараның милли кейемгә арналған өлөшө лә мауыҡтырғыс итеп уйлап төҙөлгән ине. Балбыҡ ағинәйҙәренең береһе Рәзилә Ибраһимова - районда был өлкәлә танылған оҫталарҙың береһе. Районда ғына түгел, республика кимәлендә лә милли кейем ярыштарында ҡатнаша. Уның һандығынан сыҡҡан таҫтар, сарыҡ, һарауыс, ҡушъяулыҡ, яға һәр кемде һоҡландырҙы. Был зиннәтле әйберҙәрҙең ҡулланылышы, эшләү алымдары тураһында ентекле белешмә лә алынды сарала.

Сара ысын мәғәнәһендә бай йөкмәткеле булып, һәр кем файҙалы мәғлүмәт алды, өләсәйҙәрҙең "күңел һандығын" тултырҙы. Ярыш программаһының бик уйланып, еренә еткереп төҙөлөүендә, уңышлы үтеүендә ойошма етәксеһе Байрамғолова Зәһинә Рәйес ҡыҙының һәм унын командаһының тырышлығы ята.

Ярыштың еңеүсеһе тип табылған Һөләймән ауылы ағинйҙәренең: "Ошо сараға әҙерлек үҙе бер ваҡиға булды беҙҙең өсөн. Кистәрен китапханаға йыйылып, күмәкләп уҡыйбыҙ, өйрәнәбеҙ. Күпме мәғлүмәт иҫкә төштө, күпме яңы белем алдыҡ. Балбыҡ ауылы ағинәйҙәренә рәхмәтебеҙ сикһеҙ", - тигәне лә үрҙә әйткәндәргә хуплау булды.

Райондың урындағы башҡорттар ҡоролтайы етәксеһе Мозафар Харис улы Ҡадиров та, Туңғатар биләмәһе хакимиәте башлығы Алмас Хәмзә улы Ғиззәтуллин да ихлас рәхмәт һүҙҙәрен әйтеп, районда "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының эшенә ҙур баһа бирҙеләр. Сараның төп бағыусылары ла ошо ике ир уҙаманы булды.

Һуңыраҡ Ҡунаҡбай ауылында үткән Мөнәжәтселәр йыйыны ла өләсәйҙәр һандығын тулыландырыусы сара булды, тиһәк, бер ҙә хата булмаҫ. Был һирәк башҡарыла торған халыҡ ижадын да йыйырға, һаҡларға, таратырға тейешбеҙ. Ҡабатланып тормаһа, хәтерҙән юйылыуы ла бар бит. Шуныһы ҡыуаныслы булды:оҙонлоҡҡа ярайһы ғына һуҙылған районыбыҙҙың ике яҡ осонан да йыйылдылар мөнәжәт башҡарыусылар.

Ҡобағош ауылынан килгән 92 йәшлек Рәхмәтуллина Кинйәһылыу инәйҙең сәхнәгә сығып, ҡулындағы яҙыулы ҡағыҙҙарын да күрһәтеп: "Бынытһы инәйемдең әйтеп йөрөгән мөнәжәте. Быларын үҙем башҡарам. Әлбиҙаҡ та әйтеп күрһәтәйем әле",- тип һәр береһенә аңлатма бирә-бирә сығыш яһауын бик яратып ҡабул иттеләр. Ярыштың яңғыҙ башҡарыусылар араһындағы төп еңеүсеһе - Баттал ауылынан Таһирова Гөлдәр Рәхмәт ҡыҙы булды. Баһалама ағзалары унын көйҙө дөрөҫ көйләп башҡарыуына иң юғары баһа бирҙе. Коллективтар араһында хужаларға, Ҡунаҡбайҙан "Аҡтеләк" ағинәйҙәр фольклор ансамбленә, етеүсе булманы. Егермегә яҡын кешене туплаған оло төркөмдөң бер иштән янып торған милли кейемдә, оҫта ғына баҫып, сәхнәгә сығып теҙелеүе лә өлгө алырлыҡ матур күренеш ине. Ойотоп ҡына әйтелгән нәсихәттәре күңелдәрҙе нурландырҙы, тыңлаған һайын тыңлайһы ғына килде. Уральск ағинәйҙәре ошо сараға уҡыусы баланы һәм атай кешене әҙерләп алып килеп, бик шәп итте. Динислам Үҙәнбаев иң йәш башҡарыусы номинацияһын алһа, яҡташыбыҙ Мәүлит ағай Ямалетдиновтың Ҡөрьәнгә шиғри тәржемәләренән Фатиха сүрәһен әҙерләп башҡарыусы Һибәтуллин Камил дә һынатманы.

Ярышҡа килгән һәр кем, һәр төркөм тик маҡтауға ғына лайыҡ. Ҡасандыр ижад ителеп, күңел түрендә һаҡланып, бөгөнгәсә килеп еткән мөнәжәттәр, нәсихәттәр көйләнгәндә илаһи бер сихри донъя сорнап ала: олатай-өләсәйҙәребеҙҙең баҫалҡы ғына тауыштарын ишеткәндәй, аҡыллы күҙ-ҡараштарын тойғандай булаһың. Эйе, һаҡларға һәм таратырға, балаларыбыҙға ишеттереп торорға тейешбеҙ был ҡомартҡыны ла.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,
Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАЛАЛАРҘЫҢ КҮҢЕЛЕН КҮРЕП...



**Йәйҙең беренсе көнө балаларға бағышланыуы бик тә матур күренеш. Нәҡ 1 июнь, Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөндә, Әбйәлил районының Амангилде менән Ҡаҙмаш ауылдары араһында урынлашҡан Биксура яланында балалар һабантуйы үтте. Амангилде ауылы советы тарафынан ойошторолған байрам һәр кемдең күңелендә матур хәтирәләр ҡалдырҙы.**

Ауыл биләмәһе башлығы Вадим Абдуллиндың байрамға саҡырып яҙҙырған видеоһы "бик күп тапҡыр ебәрелгән" билдә аҫтында чаттан-чатҡа күсеп йөрөп, тиҙ арала меңәрләгән кеше тарафынан ҡаралды. Элекке колхоз-совхоз осоронда һабантуйҙар гөрләп уҙған яланда үтәсәк байрам ололарҙың хәтирәләрен яңыртып ебәрҙе, бала саҡтарына алып ҡайтты. Ысынлап та, шул төбәктә тыуып үҫеүселәр өсөн был матур ялан йыл да көтөп алынған һабантуйҙарҙың символына, төрлө төбәктә йәшәгәндәрҙең осрашып аралашыу урынына әүерелгән урын булараҡ ҡәҙерле. Шуға күрә, үтәсәк балалар һабантуйына кемдең күңеле нығыраҡ талпынғандыр - кескәйҙәрҙекеме, әллә уларҙың ата-әсәләре, олатай-өләсәйҙәренекеме - әйтеүе лә ауыр.

Байрам көнө Биксура буйы иртә менән машиналар шауына, шат тауыштарға күмелде, шишмә буйында самауырҙар борланы. Майҙан матурланып бәләкәс ҡунаҡтарын ҡаршы алырға әҙерләнгән: спорт ярыштары үтәсәк урындар билдәләнгән, сәхнә биҙәлгән, тәм-том һатыу ойошторолған, бер нисә урында тирмәләр ҡоролған. Шуны айырым билдәләп үтергә кәрәктер: бай өҫтәлдәр менән ҡоролған ҙур, матур тирмәләрҙең һәр береһе балаларҙың йәше буйынса билдәләнгән. Теләге булған һәр баланың тирмәгә инеп сәй эсеп, ашап сығыу мөмкинлеге булды. "Был ысынлап та беҙгәме, апай?" - тип тирмә ишегенә башын тығып һораған баланың аптырауы ла, шатланыуы ла күҙендә сағылды. "Бала күңелен яулау өсөн күп кәрәкмәй", тигән халыҡ. Шөкөр, балалар ас-яланғас түгел, күңелдәре ни теләй - шуны ашап, нимә теләй - шуны кейеп үҫә, аш-һыу менән аптыратаһы түгел. Ләкин нәҡ улар өсөн генә өҫтәл әҙерләүҙәре, ҙур иғтибар балаларҙы бер башҡа үҫтереп, күңелдәрен күтәреп, хәтерендә яҡты тойғолар менән һаҡланасаҡ икәнлегенә шик юҡ.

Әлбиттә, һәр һабантуй спорт ярыштары менән мәртәбәле. Был көндә Биксура буйына йыйылған йәш спортсыларҙың һәр береһе еңеүгә булған ҙур ынтылышын күрһәтте. Көрәш майҙанында бәләкәй батырҙар бил һынашты, сосораҡтары бер-бер артлы ауыш ҡолғаға менеп төштө, тоҡ менән һуғышып, кем таһылыраҡ икәнлеген асыҡланы, футбол һәм волейбол, башҡа уйын майҙансыҡтары гөрләп торҙо. Ат ярышы уҙмаған һабантуй һабантуй буламы инде! Биксура буйында ла ат сабышы ҡыҙыу булды. Көйәрмәндәрҙең күтәрмәләгән тауыштары аҫтында тал сыбыҡҡа атланған һыбайлылар бер-береһенә ал бирмәне, "аттарын" бар көскә ҡыуҙы.

Байрамдың мәҙәни өлөшө лә бай, йөкмәткеле булды. Әбйәлил еренең таланттарға бай төбәк икәнен тағы бер иҫбатланы был һабантуй. Йыр-бейеүҙән гөрләп торған сәхнә янындағы эскәмйәләр бушаманы, һәр бер сығыш көслө алҡыштарға күмелде. Иртә менән башланған концерт байрам тамамланғансы дауам итте.

- Ойоштороусыларға, бағыусыларға рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ. Балалар өсөн генә түгел, ололар өсөн дә иҫ киткес матур сара булды. 80-90-сы йылдарҙа гөрләп уҙған совхоз һабантуйҙары ваҡыттарын иҫләп-хисләнеп, туғандар менән осрашып һөйләшеп, Биксура яланында рәхәтләнеп ял иттек. Байрамға 5 баламды алып, Өфөнән махсус ҡайттым. Улар төрлө халыҡ уйындарында ҡатнашты, яңы дуҫтар тапты, - тип үҙенең тәьҫораттары менән бүлеште Азамат Әғләмов.

- Биксура буйындағы һабантуйҙар бала саҡтан күңелгә уйылып ҡалған. Былтыр көҙ ауыл советы башлығы булараҡ эш башлағас та күңелдә балаларға ошондай матур байрам ойоштороу тураһында уйҙар тыуҙы һәм беҙ уны күмәкләп атҡарып сыҡтыҡ. Һабантуйға күп кеше йыйылды, балалар уйнаны, көлдө, ярышты һәм бүләктәр алып шатланды. Ошондай матур байрам ойоштороуҙа бағыусылар, ауыл депутаттары, ағинәйҙәр һәм ирҙәр ҡоро ағзалары, Ҡаҙмаш һәм Амангилде урта мәктәптәре хеҙмәткәрҙәре, ғөмүмән ике ауыл халҡы ла ҙур өлөш индерҙе. Һабантуй матур ғаилә байрамы булып һәр кемдең күңелендә оҙаҡ һаҡланыр, тип өмөт итәм, - тине биләмә башлығы Вадим Рәфҡәт улы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был һабантуйҙың әһәмиәте айырыуса ҙур - ул балаларға рухи аҙыҡ бирә, туған мәҙәниәтебеҙгә һөйөү тәрбиәләй, халҡыбыҙҙың милли уйындарын белеп үҫергә булышлыҡ итә. Интернет аша бөтә донъяны гиҙгән, сит ил музыкаһын тыңлаған һәм шуларҙың мәҙәниәтен, донъяғи ҡараштарын күңелдәренә һеңдереп үҫеп барған йәш быуынды үҙебеҙҙең милли ерлектән бөтөнләй ҙә айырылыуынан һаҡлап ҡалыуҙың бер юлы ул бындай милли һабантуйҙар.**

**Гөлназ МАНАПОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Хәҙерге физика һәр киҫәксәнең киреһе булыуын раҫлай. Электрондың киреһе - позитрон, есемдеке - антиесем һ.б. Киҫәксә үҙенең киреһе менән ҡушылһа, есем юҡҡа сыға һәм ҙур энергия күләме менән алмашына, йәғни ҡапма-ҡаршы киҫәксәләрҙең ҡушылыуы беҙгә уларҙы энергияға әйләндереү мөмкинлеген бирә. Әйткәндәй, изге китаптарҙа сексуаль энергияның үҙ киреһе менән ҡушылыр өсөн ҡабат үҙ сығанағына ҡайта алыуы тураһында һөйләй.

Веда кеүек боронғо манускриптар һәр ваҡыт тигәндәй илаһты ҡатын-ҡыҙ итеп күҙаллай һәм сексуаль энергияны күтәреү юлы менән илаһи торошҡа етеү мөмкинлеген күрһәтә. Ни өсөн? Сөнки урмыртҡа һөйәгенең нигеҙендә урынлашҡан сексуаль энергия өҫкә күтәрелгәндә йышлығын үҙгәртә һәм хайуани энергиянан трансцендент һәм илаһи энергияға әйләнә.

Тәжрибәләрем һәм тикшеренеүҙәрем шундай һығымтаға килтерҙе: ысын мөхәббәт (ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ миңә үпкәләр ҙә) - ул дүртенсе чакра, йәғни йөрәк кимәленә тиклем күтәрелгән сексуаль энергия. Шуға күрә секс һәм мөхәббәт - ул икеһе бер үк нәмә! Уларҙың асылы бер, бары тик йышлыҡтары ғына төрлө! Ә хәҙер хәтерегеҙгә һалып ҡуйығыҙ: һан бер ваҡытта ла сифатҡа тиңләшә алмай, йәғни кадуцей тирбәлешен алмаштыра алмай.

## Медитация

Медитация - ул ирекле ғәмәл, уның барышында беҙ аңдың төрлө торошон һынар һәм беҙҙе көндәлек тормошта урап алған энергетик тулҡындар менән бәйләнешкә инер өсөн иң юғары йышлыҡтарҙа коллектив аң менән бәйләнеш булдырабыҙ.

Кем нисек теләй - шулай медитация эшләй, әммә минеңсә, иң ҡыҙыҡлыһы - ете чакраға һәм илаһи образдарға иғтибар туплау. Умыртҡа бағанаһы антеннаһының төрлө торошона барлыҡ уйығыҙҙы йүнәлтеп иғтибар туплап һеҙ аңығыҙҙың һөҙөмтәлелеген арттыра һәм уйҙарҙың ни тиклем файҙалы икәнлеген аңлай алаһығыҙ.

Ә илаһи образдар ни өсөн кәрәк? Аллаһты күҙаллау һеҙҙең уйҙарығыҙ тиҙлегенән дә шәберәк тиҙлектә тирбәлә. Аңығыҙҙың барлыҡ көсөн образдарҙың береһенә йүнәлтеп, һеҙ уны ошо аңлатып булмаҫлыҡ йышлыҡтар кимәленә ҡаршы осорға мәжбүр итәһегеҙ.

Бында квант физикаһы ярҙам итмәҫ. Әммә был минең ғәйебем түгел: фән тамамланған урында иман башлана. Һәм бында барыбер ҙә физиканың иң мөһим принцибын ҡулланырға мөмкин: тәжрибә!

Муса бәйғәмбәр Аллаһы Тәғәлә менән һөйләшергә теләгәндәрҙең барыһын да кешеләрҙән ситләшергә өндәгән. Икенсе төрлө әйткәндә, медитатив торошҡа инеп уйҙарҙы Аллаһта тупларға ҡушҡан - ҡалғаны тураһында ул үҙе хәстәрлек күрәсәк.

Барлыҡ талаптарға тап килтереп башҡарылған тәрән медитация - тормошомда башҡарып ҡараған иң һоҡланғыс нәмә булды. Ул минең иртәнге ғәҙәттәремдең иң беренсе күнегеүе.

**Пьер МОРАНСИ.**

ҺӘР КЕМ ИҒТИБАРЫНА

# АҒАСТАРҒА КҮБӘЛӘК ЯБЫРЫЛА



**Парһыҙ ебәк күбәләге (шелкопряд) - эребидтар ғаиләһенә ҡараған күбәләк, үҫеш стадияларының бер өлөшө ағас ашап үтә. Башта был күбәләк Американы баҫып алған, һуңынан Рәсәйгә индерелгән, тип аңлатты биология фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге етәксеһе Василий Мартыненко "Башинформ"да үткән матбуғат конференцияһында.**

Ебәк күбәләге үрсеүе 10 йылдан 12 йылға тиклем дауам итә. Улар Башҡортостан урманын иң күбе 1976 йылдан 1978 йылға тиклем ашаны, әммә ҡарлы һәм һалҡын ҡыштарҙан һуң кәмене. Әле парһыҙ ебәк күбәләге Өфө йүнәлешендә, көньяҡ-көнсығыштан төньяҡ-көнбайышҡа табан хәрәкәт итә. Былтыр "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы яғындағы ағастарҙы яланғасландырҙылар. Уларҙың ваҡыты-ваҡыты менән күбәйеүе сәбәптәре тураһында ғалимдар һаман булһа бәхәсләшә.

"Рәсәй урманын һаҡлау" федераль бюджет учреждениеһы филиалы - "Башҡортостан Республикаһы урманды һаҡлау үҙәге"директоры Сергей Бутин аңлатыуынса, ҡарышлауыҡ айырыуса имән, ҡайын һәм емеш ағастарын ярата. 2-3 йыл рәттән йәй ҡоро килһә, үрсейҙәр. Һыуыҡ ҡыш улар өсөн хәүефле, әммә быйылғы ҡыш Башҡортостанда һалҡын булманы. Көслө ел уларҙың таралыуына булышлыҡ итә.

Космостан төшөрөлгән һүрәттәр, мониторинг һәм тикшереүҙәр улар үрсегән урындарҙы асыҡларға ярҙам итә. Иң һөҙөмтәле сара - иҫкәртеү. Йомортҡа һалған ботаҡтарҙы ярты метрҙан кәм булмаған тәрәнлектәге соҡорға күмергә, яндырырға кәрәк, тип аңлатты Сергей Бутин. Парһыҙ ебәк күбәләге йомортҡа һалған урын төк менән ҡапланған кейеҙ кеүек күренә. Ҡурсаҡтарын минераль май һалынған кәрәсин менән эшкәртергә, ағас олоно ярыҡтарын майларға, ағастағы ҡарышлауыҡтарға инсектицид һибергә мөмкин.

Василий Мартыненко парһыҙ ебәк күбәләге менән көрәштең өс ысулы тураһында һөйләне: "Был химик, биологик эшкәртеүҙәр һәм тирә-яҡ мөхиткә бөтөнләй зыян килтермәгән ата күбәләктәр өсөн феромон тоҙаҡтары. Әммә был ысулдың һөҙөмтәһе киләһе йылға ғына күренәсәк. Парһыҙ ебәк күбәләгенең тәбиғи дошмандарына килгәндә, был бөжәктәрҙең үҙенсәлеге арҡаһында улар бик аҙ. Ҡоштарҙан уны кәкүк кенә ашай. Тәбиғәттә йөнлө ҡарышлауыҡтарҙы ашай алған ҡоштар бик аҙ. Миллиардлаған ҡарышлауыҡ тыуған йылда кәкүктең тотош армияһы кәрәк булыр ине, - тип билдәләне Василий Мартыненко. - Шуға күрә урманды химик эшкәртеүгә рөхсәт бирергә кәрәк".

Республика халҡы парһыҙ ебәк күбәләге таралыу урынын асыҡлауҙа ярҙам күрһәтә һәм урманды һаҡлау үҙәгенә хәбәр итә ала. Берҙәм диспетчер хеҙмәте телефоны - 8-800-100-94-00.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

***✓ Өфөгә нигеҙ һалынғандан бирле уны береһе лә яулап алмаған. Пугачев ихтилалы ваҡытында ла ул ҡамауға түҙә, штурмды кире ҡаға. Шуға уны еңелмәҫ ҡала тиергә була.***



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ӨФӨГӘ - 450 ЙЫЛ

**1574 йылдың иртә яҙында Ағиҙел йылғаһы менән Ҡариҙел йылғаһы ҡушылған бейек ярымутрауҙа Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалына. Ул тулыһынса хәҙерге Дуҫлыҡ монументы урынлашҡан Беренсе май майҙанына һыйған.**

Унын дөйөм майҙаны 1,2 гектар, стенаһынын оҙонлоғо 440 метр самаһы булған. Башҡорттар ҡаланы тәүҙә Торатау тип, ә имән стеналар менән уратып алынғас, Имәнҡала тип йөрөтә. 1586 йылдан башлап Өфө ҡәлғәһе ҡала тип атала башлай. Ошо уҡ йылда Өфөгә уҡсылар отряды етәксеһе, ҡаланың беренсе воеводаһы Михаил Нагой килә. 1592 йылда ҡалала 180 ир-ат, шул иҫәптән 150 уҡсы, 3 пушканан атыусы йәшәгән. 2007 йылда Өфө-2 ҡаласығы урынында (Воровский-Пушкин урамдары киҫешкән урында) үткәрелгән археологик ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәһендә V-XVI быуаттарҙа был урында ҡәлғә булыуы асыҡлана.

**Баш ҡалабыҙ тураһында:**

- Өфө Рәсәйҙең иң оҙон ҡалалары араһында өсөнсө: Сочи, Волгоградтан һуң; шулай уҡ майҙаны буйынса етенсе - Заполярный, Норильск, Сочи, Санкт-Петербург, Мәскәү, Пермдән ҡалыша.
- Һәр аэропорттың өс хәрефтән торған коды бар. Ә Өфө кодының халыҡ-ара авиацияла ҡабул ителгән латин хәрефтәре менән дә, Рәсәйҙең кириллицаһында ла яҙылышы бер төрлө: Уфа һәм UFA. Был уны ер йөҙөндә берҙән-бер итә.
- ИНН - һалым түләүсенең индивидуаль һанын иң беренсе Өфөлә ҡулланып ҡарағандар.
- Башҡортостанда бик билдәле "Деньги есть - Уфа гуляем, денег нет - Чишма сидим", тигән әйтем Өфө ҡалаһы һәм Шишмә районына, йәки Шишмә ҡасабаһына түгел, ә ҡаланың үҙәгендә урынлашҡан "Өфө" ресторана менән уның эргәһендәге "Шишмә" кафеһына бәйле барлыҡҡа килгән.
- Ҡала аҫтында 20 тәбиғи мәмерйә һәм гипс сығарыу штольняһынан торған система бар. Бер генә мәмерйәнең ауыҙы асыҡ ҡалдырылған, ҡалғандары ҡапланған. Иң оҙон мәмерйә - Дудкин мәмерйәһе, ул 2620 метрға һуҙыла.
- XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Өфө гербын юғалтып, ҡыҙыл баҫыуҙа сабып барған күк ат төшкән яңыһын ҡулланылышҡа индерергә маташалар. Әммә уны ҡала халҡы ҡабул итмәй һәм 1782 йылда Өфө наместниклығын биҙәгәндә һыуһар төшкән элекке герб ҡайтарыла.
- 2020 йылдан Өфө - "Хеҙмәт фиҙаҡәрлеге һәм дан ҡалаһы".
- Өфөгә нигеҙ һалынғандан бирле уны береһе лә яулап алмаған. Пугачев ихтилалы ваҡытында ла ул ҡамауға түҙә, штурмды кире ҡаға. Шуға уны еңелмәҫ ҡала тиергә була.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.**

**20-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Талаҡ. Ҡарауыл. Аванс. Әхлаҡ. Айсыҡ. Аладдин. Миәкә. Тукал. Астана. Талип. Һум. Алмаш. Аран. Инәй. Айғыр. Ион. Окоп. Ек. Киви. Айран. Харисов. Зирәк.

**Вертикаль буйынса:** Мостафин. Әғәҙуллина. Әҙип. Иле. Ҡала. Колхоз. Ҡараҡ. Торҡа. Һөйәк. Ишбикә. Абдрахманов. Киото. Ҡалас. Вал. Ант. Анапа. Урал. Арба. Ҡол. Шаран.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10-11 июнь "Юғалған ваҡыт артынан..."** (Е. Шварц), әкиәт буйынса. 10.30 6+

**11 июнь "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 12+

**13 июнь Фәрдүнә Ҡасимованың** юбилей кисәһе. 17.00 12+

**14 июнь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+

**15 июнь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**10 июнь "Волшебная мельница"** (М. Кәрим), әкиәт. 11.00 0+

**11-12 июнь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 11.00 0+

**12 июнь "Синяя-синяя речка"** (Б. Вахтин). 18.00 12+

**14 июнь "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 10.30 6+

**"Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 11.45 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**12 июнь "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+

**13-14 июнь "Путешествие в театр кукол",** экскурсия, уйын бүлмәһе менән **"Приключения Доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 11.00 0+

**15 июнь "Приключения Доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 12.00 0+

**"Два кота"** (О. Штырляева). 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 июнь "Баттл теноров"** концерт. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**10-11 "Безопасные каникулы"** (Л. Ниғмәтуллина). 11.00 0+

**14-15 "Золушка"** (Ш. Перро), әкиәт. 11.00 0+

## БР Милли музейы

**11 июнь "Салауат - ғүмерлеккә батыр"** күргәҙмәне асыу. 6+

**"А.М. Виноградов. Өфөнөң фото йылъяҙмаһы"** күргәҙмәне асыу. 6+

**14 июнь "Өфө ҡалаһының тарихи йылы. Тамғаларҙа һәм заман символдарында Өфө тарихы"** күргәҙмәне асыу. 6+

**"Йәш археолог курсы"**, сара. 14.00 6+

**"Ротангтан кашпо үреү"** оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

**15 июнь "Элмә"** тамбурлы сигеү буйынса оҫталыҡ дәресе. 12.00 12+

*СПОРТ*

# БЕҘҘЕКЕЛӘР БУЛДЫРА!

Башҡортостан спортсылары батутта һикереү буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары призерҙары булды. СССР-ҙың атҡаҙанған тренеры Виталий Гройсман иҫтәлегенә арналған ярыштар ошо көндәрҙә Һамар өлкәһенең Тольятти ҡалаһында уҙҙы һәм илдең 11 төбәгенән 300-ҙән ашыу ҡатнашыусыны йыйҙы. Ярышта спорт мастерҙары программаһы буйынса Башҡортостандан Михаил Николаев көмөш миҙалға лайыҡ булды, ә Платон Кононов бронза миҙал алды. Спортсылар батутта синхрон һикереүҙә лә көмөш миҙалдар яуланы.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БӘЛӘКӘЙ ТЕАТРҘАР БӘЙГЕҺЕ

**Был аҙнала Өфөлә Рәсәйҙең бәләкәй ҡалалары театрҙары фестивале тантаналы асылды. Фестиваль ун икенсе тапҡыр уҙғарыла. Уны Мәскәүҙән Милләттәр Театры РФ Мәҙәниәт министрлығы, Евгений Мироновтың "Театраль башланғыстар" мәрхәмәтлек фонды, БР Мәҙәниәт министрлығы һәм Өфө ҡала хакимиәте ярҙамында ойоштора. Сара 2-9 июндә үтә.**



Фестивалдә быйыл Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 16 ижади коллектив ҡатнаша. Улар араһында Башҡортостан, Татарстан, Удмурт республикалары, Ханты-Манси автономиялы округы - Югра, Пермь, Красноярск крайҙары, Псков, Кемеров, Свердловск, Иркутск өлкәләре театрҙары бар. Эксперттар советы ҡарары менән фестивалдең конкурс программаһына Новоуральск, Прокопьевск, Стәрлетамаҡ, Губаха, Великие Луки, Серов, Березники, Братск, Нижневартовск, Кудымкар, Глазов, Әлмәт, Новокузнецк, Канск, Нягань ҡалалары театрҙарының спектаклдәре һайлап алынған.

- Беҙ үҙебеҙҙә илдең иң алдынғы театр фестивалдәренең береһен - Рәсәйҙең бәләкәй ҡалалары театрҙары фестивален ҡабул итәбеҙ. Был беҙҙең өсөн бик әһәмиәтле ваҡиға, айырыуса республикабыҙҙың баш ҡалаһы Өфөнөң 450 йыллыҡ юбилейын байрам итер алдынан. Бөгөн беҙҙә төрлө саралар бик күп үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, был фестивалде лә шатланып ҡабул иттек, сөнки был тағы бер ижади йүнәлеш. Тимәк, халҡыбыҙға онотолғоһоҙ тәьҫораттар бүләк итә торған кистәр күп буласаҡ. Әҙерлек йәһәтенән бөтә берҙәм команда бер-береһен аңлап, теүәл эшләүҙәре өсөн рәхмәт әйтәм. Уртаҡ тырышлыҡ менән байрам матур үтер. Барығыҙҙы ла Өфөлә күреүебеҙгә шатбыҙ һәм йылы тәьҫораттар ҡалдырыр, тип өмөт итәбеҙ, - тине БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

Фестивалдең художество етәксеһе, Рәсәйҙең халыҡ артисы Евгений Миронов та ҡатнашыусыларҙы тәбрикләп сығыш яһаны. Ул фестиваль бер тапҡыр ғына үткәрелә торған сара түгеллеген, коллегалары менән йыл дауамында эшләүҙәрен, ижади лабораториялар эшләүен, режиссерҙар белем биреү программаларын үткәреүен билдәләп үтте һәм фестивалдең кимәлен күтәргән талантарға рәхмәтен белдерҙе.

Фестивалдең баһалама комиссияһын режиссер, Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Адольф Шапиро етәкләй, уға был эштә Рәсәйҙең халыҡ артисы Ольга Остроумова, алдынғы театр тәнҡитселәре ярҙам итә. Улар алдында "Ҙур формалағы иң яҡшы спектакль", "Бәләкәй формалағы иң яҡшы спектакль", "Иң яҡшы ир-егет роле", "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияларына һәм "Өмөт" призына лайыҡ булыусыларҙы билдәләү бурысы тора. Ҙур һәм бәләкәй формалағы спектаклдәр араһында еңеүселәр Мәскәүҙә, Милләттәр Театры сәхнәһендә сығыш яһаясаҡ.

Әйткәндәй, Башҡортостан данын был юлы Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең И. Йомағолов исемендәге Башҡорт драма театры яҡлай: ижади коллектив Флорид Бүләков әҫәре буйынса режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев ҡуйған "Гөлнара" спектаклен алып килгән. Ул 6 июндә М. Ғафури исемендәге БАДТ сәхнәһендә күрһәтелде.

# ҠАФ ТАУЫНАН ҠУНАҠ КИЛӘ

**Ҡунаҡсыллыҡ боронДан ҡаныбыҙға һеңгән. Тимәк, был йоланың киләсәге бар - ҡанға һеңгән хәтер быуындан-быуынға күсә. Беҙ бит күршебеҙ үҙ йомошо менән инһә лә оло ҡунаҡтай күрәбеҙ, ә инде алыҫтан сит-яттар килһә, йығылып китерҙәй булып ҡунаҡ ҡаршылайбыҙ.**

Тиҙҙән Ҡаф тауҙарынан ҡунаҡтар килергә тора. Дағстан Республикаһының Дербент ҡалаһынан Табасаран театры беҙҙең тарафтарға юлға сығырға йыйына. Көҙгөһөн беҙҙең Сибай театры, ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы, тигәндәй, Кавказ яҡтарына гастролгә барасаҡ. Был осрашыуҙар Рәсәй буйынса барған "Ҙур гастролдәр" программаһы сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Ҡунаҡтарыбыҙ, әлбиттә, буш ҡул менән килмәй, улар, йолаға ярашлы, күстәнәстәрен алып килә. Балалар өсөн "Өләсәй серҙәре" спектаклен бүләк итһәләр, өлкәндәргә "Кәйнә" һәм "Кул таяҡлы байрам" исемле ике спектакль күрһәтәсәктәр. Исеменән үк күренеп тора, "Кәйнә"ләге ваҡиғалар ҡәйнә менән килен араһындағы мөнәсәбәттәргә ҡоролған, ғаилә бәхете матди байлыҡта түгел, ә йылы мөнсәбәттәргә бәйле икәнен табасарандар беҙгә тағы бер тапҡыр иҫбатлаясаҡ. "Кул таяҡлы байрам" комедияһы ла сибайҙарға хуш килер, моғайын. Әлегә әстәлеген алдан һөйләмәйем, тамашаны килеп күреү күпкә ҡәҙерлерәк бит ул. Ҡунаҡ әҙ ултыра, күп һынай, ти башҡорт мәҡәле. Беҙ уларҙы, улар беҙҙе һынарҙар - ике яҡтың да ихласлығынан тора инде һынау кимәле.

Ихласлыҡҡа килгәндә, ул сифатты ла беҙгә кемдәндер бурысҡа алып тороу кәрәкмәй, унлы-һуллы ҡыуанып таратабыҙ беҙ уны. Тик бер уңайһыҙлыҡ бар: Табасаран театрына 21 йәш, беҙгә - 91! Тимәк, олатай-өләсәй ейәнейәнсәрен ҡаршы алып ҡунаҡ иткән һымаҡ була түгелме? Нисек булһа ла, ҡунаҡтар тамашаһы ике көн - 11, 12 июндә дауам итәсәк.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# БЕҘ - СЕРКӘШТӘР

Ҡул-аяҡ ярылып, ҡыҙарып тороуҙы халыҡта **"себешке"** тигән һүҙ менән атау киң таралған. *Мәҫәлән, аяҡҡа себешке сығыу.* Ә себешкегә әйбер һалып буламы? Әлбиттә, тик был юлы "себешке"гә бөтөнләй бүтән мәғәнә йөкмәтелә.

Шулай итеп, "себешке"нең тағы бер мәғәнәһе ул - "Ҡайын ороһо". *Ҡайында бер нисә себешке бар. Себешкенең сир-сырхауҙы дауалауҙа файҙаһы ҙур.*

Ҡайын ороһонан эшләнгән һауыт та "себешке" тип атала. *Сөм себешке. Себешкегә гөл ултырттыҡ.*

**Серкәш.** Был һүҙ беҙҙең өсөн үтә лә ҡыҙыҡлы, унан боронғолоҡ аңҡый. "Серкәш" этнонимға, йәғни, халыҡ исеменә ҡарай. Ә ҡайһы ҡәүем була икән ул, тигән һорауға яуапты әллә ҡайҙан эҙләү ҙә урынһыҙ: сөнки серкәш ул беҙ үҙебеҙ, башҡорттар. Беҙҙең халыҡты фарсылырҙың "серкәш" тип атағанын белеп ҡуйыйыҡ. *Серкәштәр турағында тарихи мәғлүмәт туплау. Серкәш батырҙарының даны киң таралған.*

**Сатра.** Ул - юл тармағы, юл айырсаһы. *Сатраға етеү. Сатрала боролош яһау.*

**Сауыл.** Ул - ҙур яңғыҙ ҡайындың икенсе атамаһы. *Алыҫта сауыл күренә. Сауыл күләгәһендә ялға туҡтау.*

**Сауыллыҡ.** "Карт ҡайынлыҡ" йә "ҡайын урманы" тиер урынға, "Сауыллыҡ" һүҙен ҡулланыу ҙа урынлы. *Сауыллыҡта ҡайын еләге ишелеп уңған. Ҡоштар тауышы сауыллыҡты моңға күмә.*

**Шулай итеп, серкәш-ҡәрҙәштәр үҙ телен белһә, сатраларҙа аҙашмабыҙ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЙҒА ЯЛЫНҒАНСЫ...

## ике ҡулыңа ялын

Ҡатыныңды хөрмәтлә, теҙгенен ҡулға көрмәклә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхет эҙләп донъя ҡыҙырмағыҙ, ул һеҙҙең эргәлә, ҡул һуҙымы арала ғына.

**(Гораций).**

Айыҡ саҡта эскән ваҡытта биргән бар вәғәҙәләрегеҙҙе үтәргә тырышығыҙ, был телегеҙҙе тыйып торорға ярҙам итер.

**(Эрнест Хемингуэй).**

Кем үҙ тормошон тулы ҡанлы итеп файҙаланған? Уның яртыһын - хыялланып, күпмелер өлөшөн ахмаҡтар менән әңгәмә ҡороп, күпмеһендер мөхәббәт утында тилереп, буштан бушҡа ваҡыт әрәм итеп үткәрмәгән берәйһе бармы?

**(Платон).**

Хаталарҙан ҡасыу өсөн тәжрибә туплау кәрәк; тәжрибә туплау өсөн хаталанырға кәрәк.

**(Лоуренс Питер).**

Кешенең тыуыуы һәм үлеүе, аҡсаһынан йәки башҡа мөлкәтенән яҙыуы ҡыҙғаныс түгел, сөнки быларҙың береһе лә уның үҙенеке түгел. Уның үҙенең байлығынан - кешелек дәрәжәһенән яҙыуы ҡыҙғаныс.

**(Эпиктет).**

Мин эште яратам. Бөтөнләй эшкә биреләм. Сөнки сәғәттәр буйына кешеләрҙең эшләүенә ҡарап ултыра алам бит мин!

**(Джером Джером).**

Ахмаҡ, кешеләр мине белмәй, тип зарлана, аҡыллы, кешеләрҙе белмәйем, тип зарлана.

**(Конфуций).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Батша бер кешене үлем яҙаһына хөкөм итә. Әммә тегеһе батшаның алдына теҙләнеп: "Батшам, әгәр минең үгеремде әҙмәһәң, ике йыл эсендә һинең атыңды осорға өйрәтер инем", - тип ялбара. Батша быңдай тәҡдимдә ҡыҙыҡып ҡабул итә һәм хөкөм ителеүсегә: "Ярай, тәҡдимеңә күнәм. Ләкин вәғәҙәңде үтәмәһәң, барыбер хөкөм итергә бойорасаҡмын", - ти. Хөкөмдән ҡотолоуына шатланып, был кеше өйөнә йүгерә. Әммә туғандары "Вәғәҙәңде нисек үтәмәксе булаһың инде?" - тип, тағы ла оло ҡайғыға ҡала. Шунда был кеше: "Ҡайғырмағыҙ юҡҡа, - ти. - Был ике йыл эсендә кем бар ҙа кем юҡ: батшаның да, минең дә донъя ҡуйыуыбыҙ ихтимал. Аттың да ятып йән биреүе мөмкин. Бәлки ул... осорға ла өйрәнер әле! "**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24022

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
6 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111998